Егет әйтә: «Афарин, ти, һөнәреңә,
Киҫкәнһең, ти, яуыз аждаһа баштарын һин,
Бәһлеүәнлек менән еңгәс аждаһаны,
Ҡайҙа ташланың һуң баштарын һин?»

Вәзир килтертте аждаһа баштарын,
Ҡуйҙыртты, ти, бөтәһен шунда бергә өйөп.
Егет, тороп ҡарап сыҡҡас ете башты,
Вәзиргә әйтте: «Был һинең эш түгел!» — тип.

«Эшләй алыр был эште, ти, был донъяла
Әгәр булһа ул егет ирҙең ире».
Ауыҙын асып ҡарап сыҡты бар башты ла,
«Ҡайҙа, тине, аждаһаның ете теле?»

Вәзир әйтте: «Теле булмай аждаһаның,
Тел булырға аждаһа бит түгел йылан.
Бер ваҡытта уғын һалғас пәйғәмбәргә,
Доға ҡылғас, ҡарғыш төшөп, телһеҙ ҡалған».

Ҡарап торған халыҡтарҙың ҡай берҙәре
Үҙҙәренең йәш вәзирен яҡлағандар,
«Аждаһаның теле булмай!» — тип улар ҙа
Шул вәзирҙең ялған һүҙен хуплағандар.

Егет сыҡты күтәрелеп урталыҡҡа,
Кеҫәһенән ҡыҙыл ебәк яулыҡ алды;
Яулығын систе лә ул күҙ алдында
Ете телде ҙур өҫтәлгә алып һалды.

Батша ҡыҙы килде егет ҡаршыһына:
«Бына,— тине,— аждаһаның ғазраиле,
Миңә хәсрәтле көнөмдә шатлыҡ биргән
Ошо егет була,— тине,— ирҙең ире!»

Хуризадә фарман бирҙе: — Ҡарағыҙ,— тип,—
Йәнлектәрҙең муйынында — гәрәбәм,— тип; —
Ис(е)мем яҙған яулыҡ бирҙем егеткә лә,
Бер ваҡытта мине эҙләп табырһың,— тип.

Батыр егет, күп көрәшеп аждаһаны
Үлтергәстен, хәл йыйырға ятты,— тине;
Йоҡлап ятҡан был егеттең яр буйында
Ошо вәзир муйынын барып сапты,— тине.

Мине алып батша булыу хыялынан
Мине лә ул яфаланы һәм ҡурҡытты.
«Аждаһаны ошо вәзир үлтерҙе»,— тип,
Ялғанларға мине ана шул ҡотортто.



Бер команда бирҙе егет йәнлектәргә,
Ырғып торҙо барыһы ла, ҡойроҡ болғап;
Ҡыҙ ишара иткән ине арыҫланға,
Булған йәнлек ялғансыны алды солғап.

Ҡулға алдылар ҡап түгеүсе ялғансыны,
Шундуҡ илтеп казематкә яптырҙылар;
Ғәйепһеҙгә ҡан түгеп, әҙәм алдағанға,
Был донъяла язаһына тарттырҙылар.

Ҙур һарайҙа оло шатлыҡ, ҡыҙ һәм егет,
Сәскә атҡан гөлдәр кеүек, нурҙар балҡа.
Булды никах: туй уйналды, ҡушылдылар,
Батыр егет булды хәҙер бер ҙур батша.

Илдә йөрөй, барын күрә күҙе менән,
Яфа, фетнә юҡмы илдә — күҙәтә ул;
Элеккенән тороп ҡалған ҡанундарҙың
Оҡшамаған ерҙәрен төҙәтә ул.

Фәҡирлектән нужа күреп үҫкәс үҙе,
Ҡул аҫтында фәҡирҙәрҙе ҡыҙғана ул.
Мал бирҙертә, өй һалдырта бөтәһенә;
«Илебеҙҙә тик ғәҙеллек булһын!» — ти ул.

Ғәҙеллектең даны сыҡты тирә-яҡҡа,
Маҡтап һөйләй уны хәҙер булған халыҡ.
Күп халыҡтың һөйләр һүҙе — тик шул батша,
«Бына, исмаһам, батша!» — тиҙәр, телгә алып.

Хуризадә бик бәхетле һанай үҙен,
Йәш егеттән ситкә алмай ике күҙен.
Тулған ай һәм былбыл менән тиңләштерә,
Көлөп ҡарап, туҡтап тыңлай һөйләр һүҙен.

Йәш бадиша бик яратып сығып йөрөй
Сәхрәләрҙә, киң далала ҡоштар аулап;
Күңел асып, йәнлектәргә мылтыҡ атып,
Ҡама, ҡамса, төлкө, ҡарсаҡтарҙы ҡаулап.

Алып ҡайта һунарҙан ул ҡай ваҡытта
Ҡыр өйрәге, ҡыр ҡаҙҙары — ҡанатлынан;
Ҡай сағында алып ҡайта ҡама, ҡамсат,
Төлкө, бүре — былары дүрт аяҡлынан.

Бер көн китте һунарға тип беҙҙең батша,
Үҙе менән эйәртте ул йәнлектәрен.
Алдан төштө, атҡа менеп, мылтыҡ тотоп,—
Эҙен ҡарап бара төрлө йәнлектәрҙең.

Диңгеҙ буйлап китте күп ер, тау һәм сағыл,
Йырак түгел алдында бер болан күрҙе;
Мылтығыны рәтләне лә, кылыс тотоп,
Акбуҙатты шул боланға табан борҙо.

Йырак калмай ул боландан, ат елдерә,
Иғтибарлап бара карап күҙе менән.
Болан керҙе сокор буйлап бер урманға,
Ул да керҙе шул боландың эҙе менән.

Бара торғас, күҙ алдында эҙ юғалды,
Эҙҙе карап йөрөп, батша яҙҙы юлдан.
Шул вакытта ишетелде колағына,
Кемдер илай, тауыш килә бер сокорҙан.

Әкрен генә бара егет, якынлаша,
Ағас башынан бер карсык: «Улым,— тине,—
Бик өшөнөм, балакайым, төшөр инем,
Төшалмайым, бирсе миңә кулың»,— тине.

Егет кулын һуҙҙы кыҙғаныып карсыкка:
«Төшөрәйем, әбей, кулымды тот»,— тине.
Сихыр менән карсык егет кулын тотоп:
«Эләктеңме? Инде хәҙер тонсок! — тине.—

Минең балам аждаһаны һин үлтерҙең,
Ете башын киҫеп-тураң күл янында;
Батша кыҙын алып батша булыр өсөн,
Килдең хәҙер һыуһап бында үҙ каныңа.

Хәҙер һинән улым конон аламын»,— ти.
Кулын ебәрмәне, йығып алды аҫка,
Булған йәнлектәрен, үҙен — сихыр менән
Барыһын да әйләндерҙе тораташка.

Аҙна булды, йәш бадиша ун көн кайтмай,
Хуризадә унан башка һис йәм тапмай;
Көн-төн илай, йоклай алмай, һарғая ул,
Хәсрәтенән һуштан яҙа, аш-һыу батмай.

Төрлө якка таралдылар эҙләүселәр,
Ҙур бүләктәр вәғәҙәләнде табыусыға,
«Йәш бадиша иҫән!» — тиеп хәбәр бирер,
Хуризадәнән һөйөнсө алыусыға.

Эҙләүселәр төрлө яктан эҙләй торһон,
Беҙ киләйек йәш егеттең ағаһына.
Айырылыуға булды хәҙер бик күп заман,
Кайҙа нишләп йөрөй икән ағаһы ла.



Бер вакытта килеп уға юл уңайы,
Казап киткән бысакка ул нык күҙ һала,
Һөйөнөслө күренмәне бысак хәле:
Яртылаштан бысак булған тутлы кара.

Белде егет туғанының хәлен хәҙер,
Ни булһа ла булған, тине, каты хәсрәт.
Ярамаҫ, тип, йоклап ятыу бәһлеүәнгә,
Йәнлектәрен эйәртте лә китте эҙләп.

Ат елдертеп бер көн, бер төн китте юлдан,
Ашкына ул, оскан коштай канат кағып.
Бер далаға барып сыкты ҙур юл менән,
Осраны алдан килгән бер аҙ халык.

Шатланышып каршы алдылар был егетте:
«Шөкөр хәҙер, батшабыҙҙы таптык,— тиҙәр.—
Иҫән-аман йөрөнөгөҙмө йөрґән ерҙә?
Хуш киләһеҙ, был ниндәй ҙур шатлык!» — тиҙәр.

Ғәжәпләнде беҙҙең егет, һис төшөнмәй,
Шулай ҙа ул тиҙ бирелмәй, сабыр итә;
Һорашкылап төрлө яктан, һүҙҙе сүплән,
Эштең асылын белә, кайтып етә.

Ике туған танымаҫлык бер төҫлөләр:
Буй ҙа, һын да һәм тауыш та, күҙ караштар,
Төҫ, торошо, кашы, күҙе — булған ере,
Нисек бер төҫтә бит былбыл-һандуғастар.

Янындағы йәнлектәр ҙә берҙәй уның,—
Окшаһа ла, шөбһәләнә Хуризадә.
Ул егет тә бер кем менән һөйләшмәне,
Батша кыҙын алып керҙе бер ыҙбаға.

«Сит илдәрҙән гиҙеп килдем мин, мосафир,
Шикһеҙ бында бар, ахыры, бер сер, тине.
Һис йәшермәй тура һөйлә, һеңелкәйем,
Ошо серҙең асылын миңә белдер»,— тине.

Хуризадә баштан алып үткән эште
Һөйләп бирҙе был көнгәсә ни булғанын,
Йәш бадиша бер көн китеп ау ауларға,
Кайтмағанын — һис хәбәрһеҙ юғалғанын.

Икеһенең бер-бер(е)һенә окшағанын
Һәм шулай ук йәнлектәре бер булғанын
Йәшермәне был егет тә, әйтеп бирҙе
Хуризадәгә: «Ул,— тине,— йәш туғаным».

«Ярай,— тине,— һин булаһың туған миңә,
Был серҙәрҙе һис әҙәмгә һин һөйләмә.
Мин китермен иртән торғас сәфәр сығып,
Табырмын. Ә һин хафаланма, һис тә көймә».

Иртән тороп, ат эйәрләп, ул бәһлеүән
Йәнлектәре менән китте, тотоп теҙген.
Бүрегә ул ҡушты, алдан бар һин, тиеп,
Табыр өсөн туғанының киткән эҙен.

Ат һикертеп барған сакта бер соҡорҙан,
Әкрен генә ашанғылап болан бара;
Йәһәт кенә ҡылысын ул ҡулға алып,
Ҡамсы һуғып, атын тартты шуға таба.

Быны күргәс, болан ҡасты соҡор буйлап,
Юрғалап ул бер юл менән тауға менде,
Тауҙан аша төштә тағы бер соҡорға,
Бороддо ла ҙур урманға барып керҙе.

Күп барманы эҙе менән соҡор буйлап,
Табалманы болан эҙен, юғалтты ул,
Барыһы ла тораташҡа әйләнгәндәр,—
Йәнлектәре менән туғанын тапты ул.

Ишетелә ағас башынан бер тауыш,
Үкһеп илай: — Инде хәҙер үләмен! — ти.—
Йыртҡыстарҙан ҡурҡып шунда менгән инем,
Өшөп бөттөм, тошалмаймын, йоҙәнем,— ти.

Ҡыҙған, балам, бынан мине ҡотҡарһана.
Ҡулың һуҙып, ошо ағастан мине алһаң,
Хәйер-доға ҡылам һиңә, бай булырһың,
Ур(ы)ның ожмах булыр, мине һин ҡотҡарһаң.

Егет һиҙҙе, уйлап алды нәтижәне,
Белде хәҙер эштең нисек булғанын.
— Кил, әбекәй,— тине,— бында яҡыныраҡ,—
Ҡулын һуҙҙы.— Килтер,— тине,— ҡулдарыңды.

Һыкрангылап, ыңғырашҡылап үрелде лә
Был егеткә ике ҡулын һуҙҙы ҡортҡа.
Егет, ҡарсыҡ ҡулын иплэп ҡыҫып тотоп,
Ҡамсы менән урап берҙе һалды һыртҡа.

— Һай, балаҡай, харап иттең мине! — тине.
Яуыз ҡарсыҡ ҡуҙҙәренән йәштәр тама.
Ҡара йылан ҡамсы һыртҡа яҡшы төшкәс,
Йылға кеүек арҡаһынан ҡандар аға.



— Балаҡайым, тағы бер һуҡ, үләйем тиҙерәк,
Һуҡһаң берҙе, тын да тартмай үләмен,— ти.—
Һүҙем тыңлап, был яфанан һин ҡотҡарһаң,
Ҡаршы килмәм, ни әйтһәң дә, күнәмен,— ти.

Егет ҡарсыҡ сәсен тотто ҡулға урап,
Һөйрәп илтте тораташтарҙың янына.
— Һуғырмын,— ти,— һиңә ҡамсы менән тағы,
Башта йән тарт быны шуларҙың барына!

Ҡайтарҙы ул сихырҙы ҡурҡыуынан:
Төҫ тә керҙе, матурланып нурландылар,
Оҙаҡ йоҡлап тороп килгән кеше кеүек,
Барыһы ла урынынан ҡуҙғалдылар.

Йөҙтүбән һалды егет ул ҡарсыҡты,
Хәнйәр менән ҡаҙап аша кукрәгенән;
Ослап алып хәнйәр менән бер ағасты,
Ергә ҡағып ҡуйҙы аша йөрәгенән.

Ике туған күрештеләр ҡосаҡлашып,
Ағаһынан һорай нәмә булғандарын,
Ҡайҙан килеп, эҙләп табып ҡара урмандан,
Үҙ янында бында нишләп торғандарын.

Бер хәбәре юҡ үҙенең, белмәй эште,
Был ҡарсыҡҡа нисек килеп бәйләнгәнен,
Булған йәнлек, аҡбуҙ атын һәм үҙенең
Ҡара урманда тораташҡа әйләнгәнен.

Мәсьәләне аңлаштылар ике туған,
Юлға сығып, ҡайтыр яҡҡа ҡуҙғалдылар;
Бер-бер(е)һенә ҡауыштылар йәнлектәр ҙә,
Ат һикертеп, былар хәтһеҙ юл алдылар.

Ике туған хәйлә ҡорҙо ҡайтҡан саҡта,
Беҙ икебеҙ ҡайтмайыҡ тиеп бер яҡтан;
Бер ваҡытта барып керәйек шәһәргә,
Беребеҙ — алдан, икенсебеҙ инер арттан.

Шулай улар китте икеһе ике юлдан,
Эҙләүселәр йөрөй эҙләп уңдан, һулдан;
Күреп шунда һөйөнсөгә сабыштылар,
Бадишабыҙ ҡайтып килә, тиеп, юлдан.

Ҡарт батша фарман бирҙе ҡаршы алырға.
Ҡайтҡан халыҡ, ҡайһы әйтә: — Барайыҡ уңға.
Ҡайһы әйтә: — Ҡайтып килә, юҡ, был яҡтан!
— Унда түгел, ҡайтып килә батша бынан!

Шулай итеп, ике арала сыкты ҡартыш,
Һәр береһе дөрөҫләй бит үҙенең һүҙен.
Бер төркөм китте ҡаршы уң юл менән,
Һулға табан китте тағын бер бүлеме.

Ҡаршылаусы, әҙләүселәр сығып китте,
Береһе — уңға, берһе — һулға, ике башка,
Оҙаҡламай ҙур һарайға ҡайтып төштө,—
Бына ғәжәп! — ике яктан ике батша.

Шаҡ ҡаттылар быны күреп: ике батша,
Бер(е)һе төндән килә, береһе — ҡибла яктан.
Арыҫлан, ҡаплан, фил, айыу, бүре, төлкө —
Икеһендә лә бер төҫлө, килә арттан.

Ике туған ҡайтып еткәс ҙур һарайға,
Ҡапкаһынан эскә инеп туҡталдылар,
Хуризадә, һарай халкы шатлыҡ менән
Ҡунаҡтарҙы ҡыуанышып ҡаршы алдылар.

Туҡталдылар һәр икеһе бар урынға,
Ҡаршы килеп карт батшаның алдына;
Гәрәбәле йәнлектәрҙе танып алып,
Хуризадә килде интәше янына.

Һарай халкы барыһы ла бергә килеп,
Ни күргәнде, ни булғанды һөйләштеләр;
Бер көлөшөп, бер ҡайғырып үҙ-арала
Һайраштылар, күгәрсендәй гөрләштеләр.

Бер аҙ көндәр торҙо улар ҡунаҡ булып,
Һәр көн шатлыҡ, ултыралар уйнап-көлөп.
Артта ҡалған ата-әсәнең хәле нисек? —
Алыҫ ара, ниҙәр барын булмай белеп.

Былар торһон хәсрәт күрмәй шатлыҡ менән
Һалкынына өшөмәйсә, батмай тиргә.
Ошо урында туҡтайым был турала,
Һаран байға күсәм хәҙер, туған илгә.

Былар киткәс, һаран байҙың малы, милке,
Янғын менән йорт-ҡаралты юкка сыкты,
Хөкүмәткә бурыс ҡалып, ер һатылды,
Кейем-һалым, аяклы мал юкка сыкты.

Ағаһынан алдап алыу файҙа итмәне,
Һары алтын тулы булһа ла бер янсыҡ,
Хыянат бит бер кемгә лә итмәй файҙа,
Билдә бер еп, ҡулға тотто иҫке ҡапсыҡ.



Даһа тундар кейеү түгел, төштә лә юҡ,
Ҡулда таяҡ,— арғымаҡтар тормай тулап!
Ҡулындағы малға туймай, кеше талап,—
Инде хәҙер үҙе йөрөй хәйер һорап.

Кәңәшләшеп бер ваҡытта ағай-эне
Юлға сыкты туған илгә барыр өсөн,
Йәш бадиша тәрбиәләп хөрмәтләргә
Ата-әсәһен үҙ янына алыр өсөн.

Нисә көндәр юлда йөрөп ике туған,
Илдәренә бер көн ҡайтып керҙе улар.
Тышкы яктан сәләмләшеп, рөхсәт менән
Өйгә кереп ата-әсәһен күрҙе улар.

Ике улын танығастын ҡарт һәм ҡарсыҡ
Күҙ йәш түгеп, ҡосаклашып күрештеләр.
Ата-әсәгә бала ғәзиз үҙ йәнендән,
Ҡул ҡыҫышып, биттәренән үбештеләр.

Ата-әсә һораштылар улдарынан,
Аҙаштырғас, улар менән ни булғанын,
Ике бала үкһеҙ ҡалғас ҡара урманда,
Ҡайҙа барып, кемгә килеп һыйынғанын.

Һөйләнеләр һаран байҙың балаларға
Ең эйәләшкән тиеп үҙен алдағанын,
Хыянатсы һаран байҙың ҡаза күреп,
Фәкир булып, бер нәрҫәһе ҡалмағанын.

Фәкирҙәргә тараттылар кейем-һалым,
Ҡай берһенә — ситса тауар, кемгә — акса.
Ҡайтыр өсөн юнәлделәр юлға сығып
Ата-әсә һәм ағаһы, йәш бадиша.

Сәфәр йөрөп ҙур һарайға ҡайтты улар,
Ҡарт бадиша, Хуризадә сыкты ҡаршы.
Йәш бадиша ҡаршыһында Хуризадә
Нурҙар сәсә, гүйә, тыуған ер ҡояшы.

Йәш егеттең ата-әсәһен ҡарт бадиша
Ҡәҙер-хөрмәт итә, һыйлай ҡоҙа тиеп.
Хуризадә ҡайныһына, ҡәйнәһенә
Якшы хеҙмәт итә, атай, әсәй, тиеп.

Бер йыл ҡунаҡ булғас бында ағаһы,
Китте сығып йәнлектәре менән бергә.
Ҙур бәһлеүән донъя гиҙә, тынып ятмай,
Осрай уға төрлө хәлдәр йөрөгән ерҙә.

Гиҙай уғлы йәш бадиша хикәйәте
Белгәнемсә тамам булды ошо урында.
Ҙур ағаһы китеп ниҙәр күргәндәрен —
Бер хикәйәт яҙырмын, тим, шул турала.

Матбуғаттан бирелһә урын был әҫәргә,
Укығанда төҙәтерһеҙ хаталарын.
Әһәмиәт бирелмәһә экиәткә,
Күренмәйсә ҡалыр булған хаталарым.

## ҘУР ЫЛАСЫН

Борон заман, көндәр ҡап-ҡараңғы саҡта,
Күгәрсендәр йәшәгән, ти, бер босмаҡта.
Мин кескенә сағымда уҡ оләсәйҙең
Һөйләгәнен хәтерләйем ошо хаҡта.

Улар элек ҙур баҡсаға хужа булған,
Унан унда йыртҡыс ҡоштар килеп тулған,
Иркенәйеп, күгәрсенде ҡыҫырыҡлап,
Баҡсаны ла алған улар тотош ҡулға.

Һеҙ тороғоҙ, тиеп, шунда оя яһап,
Кәсеп итеп, тик ятмайса, эшләп-ашап,
Хәҙер инде баҡсағыҙға беҙ хужа, тип,
Етәр инде, күп торҙоғоҙ, тип, бик анһат.

Көндәр үтә, иптәш арта ҡарғаларға,
Сар-сар итеп йыйылалар сәүкәләр ҙә,
Ҡарғаларҙың тирәһендә ҡойроҡ бутап,
Күгәрсенде йәберләй, ти, улары ла.

Ҡарғаның күп ҡаралары, алалары,
Ҡарт-короһо, уртансыһы, балалары;
Хәҙер инде үҙҙәренә оя яһап,
Нигеҙ корған аталары, аналары.

Кәңәш менән килгән унда һайыҫҡан да,
Бирәһеҙме ер-һыу, тиеп, һайыҫҡанға?
Ҡарға уларҙы шатлыҡ менән ҡабул иткән,
Һайыҫҡандар ҡараҡлыҡҡа һалышҡанға.

Күгәрсендәр оя яһап, күкәй һалған,—
Һайыҫҡан һәм ала ҡарға урлап алған.
Күкәй баҫып, бала үҫтерәм тигән саҡта,
Күгәрсендәр, бисаралар, мәхрүм ҡалған.

Тора-бара күгәрсенде нишләтәләр?-
Өҫтәренә йыртҡыстарҙы һөслэтәләр.



Ә үҙҙәре ит-май ашап, күкәй эсеп,
Йәберләп, ас күгәрсенде эшләтәләр.

Ҡарға, сәүкә күгәрсенгә һөжүм яһай,
Күгәрсендең балаларын тотоп ашай;
— Һеҙгә ер-һыу бирелмәй,— тип,— ой яһарға,—
Күгәрсендең ояларын ватып ташлай.

Шулай итеп, йәбер-яфа сиктән ашты,
Ҡарға, сәүкә, һайыҫҡандар бик һаташты.
Йыуаш мәхлүк күгәрсендәр нишләһендәр,
Торалманы йыртҡыстарға һис тә ҡаршы.

Шул ваҡытта бер ҡарсыға күргән ҡарап:
«Дошмандарҙың яуызлығы,— тигән,— харап!»
Юғалмаҫлыҡ китап итеп яҙып ҡуйған:
«Көн итеүҙәр ярамай,— тип,— урлап-талап!»

«Бөтһөн,— тигән,— ҡарға, сәүкә, һайыҫҡандар,
Кеше хаҡын ашай торған яуыз йәндәр!
Бөтһөн,— тигән,— был донъяла йәбер, золом,
Ғәҙелһеҙлек, ҡан эсеү һәм кеше алдау!»

Телəгенә еталмаған, күскән йыраҡ,
Яфа сиккән күгәрсендәр ҡалған илап;
Һүҙе ҡалған, маяҡ ҡаҙап юл ҡалдырған,—
Ҡайтмаҫ ергә барып үҙе алған торлаҡ.

Уның урынын алып ҡалған бер ҡарсыға,
Көрәш менән сыҡҡан дошмандар ҡаршыға;
Бейек тауға осоп-ҡуныг һүҙ һөйләгән:
— Етәрмен, тип, ҡарға, сәүкәләр башына.

Ул да әйткән: «Әшсән ҡошҡа — тигеҙлек,— тип,—
Етәр инде, улар бик күп иҙелде,— тип,—
Баҡсағыҙҙан йыртҡыстарҙы ҡыуыр өсөн,
Тырыш ҡоштар, берләшегеҙ, килегеҙ!» — тип.

Ул да уйлаған уйына етешалмаған,
Күсеп киткән, телəгенә ирешалмаған,—
Күгәрсендәр иркенлеккә сыҡһын өсөн,
Донъяла һис онотолмаҫлыҡ эш эшләгән.

Ул да киткәс, ҡарға, сәүкә йөрөй иркен,
«Беҙҙеке, тип, аҫыл зат, мал, бөтә ил-көн!
Әгәр тағы килә икән шул ҡарсыға,
Белеп торһон, беҙҙең ҡулдан китмәҫ бөтөн».

Сиктән ашкан вәхшилек тә, яуызлыҡ та,
Урлашыуҙар, юлдар баҫыу, намыҫһыҙлыҡ;

Ҡарға, сәүкә, һайыҫҡандар кәңәшләшкән,
Тиешкәндәр: «Теге килһә, торорбоҙ нык!»

Бер ваҡытта йыйын яһап шаулашҡандар,
Йыйылышта күгәрсендә ҡаулатҡандар;
Торор урын, эшләргә эш табалмайса,
Күгәрсендәр бушҡа эшләп асыҡҡандар.

Күгәрсендәр йөҙәгәндәр тамам асҡа,
Йөн ҡойолған, ҡалғандар шау яланғасҡа,
Ҡара төндә ер йөҙөнә ҡояш булып,
Ер тетрәтеп, бер ҡош ҡунған ҙур аҡасҡа.

Як-яғына ҡараңғылап күргән шунда:
Йортһоҙ, илһеҙ күгәрсендәр — унда, һулда.
«Был ниндәй эш? Берәү эшләй, берәү ашай,
Ғәҙелһеҙлек бөтә ҡоштар донъяһында!..»

Асыу менән күтәрелгән күккә Ыласын,
Йәйеп ҡуйып ил өҫтөнә ҙур ҡоласын:
«Иҙелгәндәр өсөн төҙәп иркен донъя,
Өҙәрмен,— ти,— ҡарға-сәүкәләрҙең башын».

Асыу менән дошмандарҙы иткән тар-мар,
Ҡарға, сәүкә баштарынан аҡҡан ҡандар.
Көрәш бит ул, ике яҡтан ҡорбан ала,
Күп юғалған ҡарсығалар, ыласындар.

Күгәрсендәр, ҡарсығалар, ыласындар
Берләшкәндәр, көрәш ҡыҙа барған һаман;
Ҡарға-сәүкә өйөрҙәрен пыр туҙҙырып,
Эш йөрөтөүҙе үҙ ҡулына алған улар.

Туҙҙырғандар яуыздарҙың ояларын,
Емергәндәр йорт-ҡураһын, ҡоймаларын,
Ҡарғаларҙан тартып алып күгәрсенгә
Өләшкәндәр толоп, итек, быймаларын.

Тотоп ябып вәзирҙәрен, батшаларын,
Буш таратып аҫыл зат һәм аҡсаларын,
Баҡсаларын күгәрсенгә бушлай биреп,
Ғәйрәт менән тетрәткәндәр, ти, ер шарын.

Күгәрсендәр киң баҡсала гөрләгәндәр,
Ыласын ҡоштоң ғәҙеллеген гел күргәндәр,
Ошо юлдан ғүмер буйы сыкмабыҙ, тип
Намыҫ менән ысын вәғ(ә)ҙә-ант биргәндәр.



Шунда бөттөм оләсәмдең әкиәтен,
Ялыҡмаһаң, тағын булыр әкиәтем.
Әкиәтте һөйләү, тыңлау ҡыйын түгел,
Белеү кәрәк уның серле бер хикмәтен.

## КЕМ КӨСЛӨ?

Кем көслө, тип бер ваҡытта уйлай себен:
Кемдәр кемде яфалай ҙа һәләк итә?
Эстән генә уйлап йөрөй ул безелдәп:
Был донъяла кемдең көсө кемгә етә?

Уйлап йөрөй, иң көслөһө үрмәкүс тип,
Беҙҙе аулай, ауға эләктереп тота;
Бер эләкһәң, ҡотолорға мөмкин түгел,
Тәнде тишә, майҙы һ(ы)уыра, ҡанды йота.

Бер аҙ уйлап әйтә шунда себен тағын,
Тикшергеләп күпселектең төрлө яғын,
Көслө заттан түгел икән, ти, үрмәкүс:
Ел бәрелһә, туҙҙырып ташлай ояһын.

Шулай булғас, унан көслө кем булыр һуң?
Дөрөҫөндә иң көслөһө булыр сыпсыҡ:
Себен менән үрмәкүсте бүрәнәнән —
Һәр ҡайҙан ул суҡып ала, итеп шыҡ-шыҡ!..

Уйлай тағын себен, был уй дөрөҫмө, тип,
Сыпсыҡ микән иң көслө зат ысын-ысындан да?
Булыр, ти ул, күрәһең бит һин сыпсыҡты,
Ни тиклем ҙур булып китә һелкенгәндә.

Башын ватты әҙләп себен көслө затты,
Ахыр сиктә түбәндәге уйға килде:
Сыпсыҡты ла тотоп ашай ҡыйғыр, тине,
Шулай булғас, ул да көслө булмай, тине.

Ҡарсығалыр, тине, көслө барынан да:
Ҡарыны асһа, ҡыйғырҙы ла ҡыуып тота!
Тәнен йырта, йөнөн йолҡа, йәнен ала,
Киҫәк-киҫәк ҡалъя яһай, ҡабып йота.

Шунан һуң да: «Кем көслө?» — тип тора уйлап,
Ыласын ҡыуа, карсығаны урман буйлап;
Ҡаҙ, үрҙәк, карсығаһын — барын еңә,
Ҙур майҙанда дан ҡалдырған батыр һымаҡ.

Ҡанатлынан табалмапы шунан көслө,
Күсте хәҙер дүрт аяҡлы хайуандарға.

Нык ентекләп тикшергеләй төрлө яклап,
Ҡайһы көслө дүрт аяклы хайуандарҙан?

Уйлап тороп әйтте: — Иң көслөһө сыскан:
Теше менән таштар ҡыра, тауҙар тишә;
Ҡараматҡа үҙе былай кеп-кескенә,—
Ер аҫтында тауҙар кеүек балсык ишә!

Арыҫланды бәйләп ҡуйған арҡандарҙы
Теше менән бер минутта киҫеп ташлай.
Тимер, ҡорос булмаһымы, уйып үтеп,
Итте, майҙы һандыктарға кереп ашай.

Бесәй килеп шунда себен эргәһенә:
— Таныйһыңмы, беләһеңме мине? — тине.
Мин батшаһын сыскандарҙың тотоп ашайым,
Беләһеңме, мин барынан көслө! — тине.

Ҡөсөк килде бесәй менән һөйләшергә.
— Мактанма, ти, күрһәт әле кайҙа көсөң?
Мин артыңдан төшкән сакта, һин, йән атып,
Ағас башына ҡасаһың нимә өсөн?

Көсөк әйтә: — Мин көслө, ти, йорт һаклайым,
Асыуланһам, бик күптәрҙе ҡыуып тотам;
Ҡайберҙәрҙе зәғифләндерәм, имгәтәм,
Ҡарным аскан сакта кайныһын ҡабып йотам.

Урмдн буйлап килеп сыкты бер карт бүре:
— Мин баһадир,— тине, ғорур кабарынып.
Көсөк яуап биреп әйтте уға каршы:
— Күп кешеләр тиреҥ тунап тегә толоп.

Айыу килде: — Мин бүренән көслө,— тине,—
Бер(е)һен түгел, еңәм ике-өсөн,— тине.—
Бер тартыуҙа умартаны ватып ташлайым,
Бер нәмә лә тормай,— тине,— еңеү өсөн.

Килеп шул сак бышкырҙы, ти, бер юлбарыҫ,
Ҡурҡыуынан карт айыуҙың китте һушы.
— Бер асыуға түҙалмаһың, һуштан яҙҙың,
Баһадирлек буламы ни инде ошо?

Шул ваҡытта килеп сыккан бер арыҫлан,
Бер акырған карап юлбарыҫ өҫтөнә:
— Тиҙ тороп кит,— тигән уға,— минең юлдан!
Юкһа хәҙер ташланырмын өҫтөңә.

Ғәйрәтләнеп килгән бер фил арыҫланға,
Филгә ҡаршы әҙерләнгән арыҫлан да:



— Көрәш булғас, аяп тороп булмаҫ инде,
Йығып ҡуйһам мин һине,— ти,— асыуланма.

Фил ҡуҙғалып арыҫланды мороно менән
Урап алып бәрмәк булған ҡара ташка.
Ҙур баһадир, уҫған кейек, көслө арыҫлан
Ташланған да фил батырҙы алған аҫка.

Дүрт аяклы хайуандарҙа баһадирлек
Филде йыккас бирелгән, ти, арыҫланға;
Әкиәттәрҙә һөйләнгәнсә, шул заттарға
Батша булып ҡалған имеш арыҫлан да.

Ғорурланып тауға менгән батыр егет,
Ғәйрәт сәсеп ил өҫтөнә бер үкергән:
Күк күкрәгән, дауыл ҡупкан, ел гөжләгән,
Һыу сайҡалған, тирәк ауған, ер тетрәгән.

Бейек тауҙар башын һуҙған күккә таба:
— Беҙ батырбыҙ, беҙҙән батыр кем булыр?! — тип,
Нисә йөҙ мең йыл йәшәп тә тоҫ үҙгәрмәй,
Беҙгә ҡаршы сығып көрәш кем ҡылыр? — тип.

Таштар тора ғорурланып, күккә ҡарап,
Эсе йәйгә, һалкын ҡышка сикмәй ғазап:
— Беҙҙең эстә һаклана, ти, магнит, алмас,
Алтын, көмөш, гәүһәр, яҡут — күп аҫыл зат.

Килеп һукты ҡеүәтле ел тау башына,
Осорҙо ул балсыктарҙы туҙан яһап,
Тәгәрәтте ҙур таштарҙы түбән таба,
Диңгеҙ буйы ҡомға урам-урам яһап.

Таштар төшкәс, Тын океан ғәйрәтләнеп:
— Мин көслө,— ти,— ҡурҡа минән барлык халык,
Ер шарында булғандарҙың барыһын да,
Эһ тигәнсе йота алам аҫка һалып.

Ел-баһадир асыу менән диңгеҙҙәргә
Ҡурҡыныслы ыжғырҙы ла һөжүм итте;
Ҡубартты ул диңгеҙҙәрҙән тау-тау тулкын,
Ситкә һөрөп һыуҙарҙы ул ҡомға һипте.

Күкрәк кереп ел-баһадир тауға баҫты,
Бер өрөүҙә осорҙо ул ҡара ташты.
Ер тетрәне, тау-таш гөрләп, урман ауҙы.
— Был ни хәл? — тип арыҫландар ҡурҡып ҡасты.

Емерҙе ул ауыл-шәһәр биналарын,
Ҡаралтыһын, торлаҡтарын, ҡоймаларын.
Ғәйрәтенә бер нәмә лә сыҙай алмай,
Асыуланһа, аҡтара ул таш-тауҙарын.

Тауға баҫып ел әйләнде төрлө яҡҡа:
— Был донъяла иң ҡеүәтле мин, ел! — тине.—
Ләкин кешеләр мине тотоп эшкә егә.
Шулай булғас, иң ҡеүәтлеһе — ил,— тине.

Ил һөнәрен бөтөрә алмаҫ телдәр һөйләп,
Ер йөҙөндә завод-фабрик тора геүләп,
Атһыҙ арба, утһыҙ фонарь, радиолар...
Өҫтәлдәрҙә патефондар тора көйләп.

Әҙәм башы ниҙәр эшләй был донъяла,
Ғилем, аҡыл ижад итә ҙур ҡеүәтте.
Әгәр бергә була икән белем, аҡыл,
Был донъяла барыһынан да шул ҡеүәтле.

Йәш балалар, хәҙер аҙаҡ һүҙем яҙам,
Тағын һеҙгә иң ҙур һөнәр уҡыу тимен.
Илле беренсе, аҙаҡ шиғырымда,
Өс ай хәл йый, тығыҙ айын уҡы, тимен.

Шуның менән тамам иттем һүҙҙәремде,
«Кем көслө?» тип, бер китапсыҡ яҙҙым көйләп.
Ике йөҙҙә һигеҙ юл ул — 52 йыр,
Бөтөнөһөн балаларға итәм бүләк.

# ШИҒРИ ХИКӘЙӘЛӘР

## ҺЫУҒА ТӨШКӘН МУЛЛА

Иртән тороп кейенде лә бер ҡарт мулла
Таяҡ тотоп сығып китте урам буйлап.
«Ике исем ҡушһам, берәй үлек йыйһам,
Бөгөн күпме төшәр?»— тиеп эстән уйлап.

Урамда ул ҡарап торҙо уңға, һулға:
«Былай барайым, күңел тарта, тине, уңға,
Китап та бит бар тип әйткән уң юл менән».
Мулла белмәй нимә көтә уны юлда.

Мулла бабай бик ашығып төшөп китте,
Туп-тураға сығар өсөн күпер аша.
Күпер ватыҡ, ике кеше төҙәтә ине,
Улар өсөн мулла булды ҙур тамаша.

Мулла бара сығам тиеп арғы яҡҡа,
Ә күперҙән алып ҡуйылған биш таҡта.
Арғы яҡҡа сығар өсөн сәбәп ошо —
Бер бай кеше сирләгән, ти, теге яҡта.

Мулланың килгәнен күреп оҫта егет
Ҡысҡырҙы бит:
— Мулла бабай, кил-мә! — тиеп.
«Мә» тигәнен ишеткән дә, күҙе тонған,
Дәшә тине: «Мулла бабай, кил, мә!» — тиеп.

Мулла уйлай: «Уңға китеү — хәйерле юл,
Китап һүҙе хәҙер тура килде,— тине.
Бер ҙә юҡҡа дәшмәҫ инде теге егет,
Насип булһа, ул саҙаҡа бирә»,— тине.

Мулла килә, яҡынлаша, һаман атлай,
Күҙен йомған, һис ҡарамай уңға-һулға.
Ә оҫталар ҡарап торалар шаҡ ҡатып,
Бер-бер доға уҡып сығыр тиеп шунда.

Мулла килә майлы күҙен ялтыратып,
Ҡайһы аҡса бирер, тиеп, шалтыратып.—
Кинәт кенә түбән табан төштө китте,
Күпер аҫты тәрән һыуҙы шамбырҙатып.

Бына бәлә тыуҙы хәҙер оҫталарға,
— Мулла һыуға осто! — тип ҡысҡыралар.
Урам тулған — ир һәм ҡатын югерешә,
Ҡуян ҡыуған бурҙай кеүек ысҡыналар.

Кемдер бераү һыу эсендә сабалана,
— Китмә йыраҡ, мулла бабай, яҡын кил! — ти.
Тонсоғоуҙа мулланың һис ҡайғыһы юҡ,
Башы һыуҙан сыҡҡан саҡта: «Бир ҙә бир!» — ти.

— Ҡулың бир! — тип ҡысҡырыша барлыҡ халыҡ,
Уға ҡаршы мулла бабай башын бутай.
Ҡайһы әйтә: «Үлгән саҡта иман әйтә»,
Ҡайһы әйтә: «Йән биргәндә ясин уҡый».

Бер аҡыллы әҙәм килде, әрләй барын:
— Утыҙ-ҡырҡ кеше бер мулланы аңламай! — ти.—
Уның мулла икәнен һеҙ беләһегеҙ,
Уларға бит «бир!» тиәргә ярамай,— ти.

Һыу ситенә килеп баҫып аҡыллы ир:
«Мулла бабай, мә! Тот! — тине,— минең кулым».
Һуштан яҙып барған мулла үрелде лә,
Теге егет тотоп алды уның ҡулын.

Бер эләккәс, һис ысҡындырмайса егет
Һөйрәп һыу ситенә сығарҙы бит уны.
Ауыҙынан күбек аға, күҙе аҡайған,
Саҡ-саҡ ҡына сыҡмай ҡалған мулла йәне.

Югерешә халыҡ, саба урам буйлап,
Абыстай һәм балалары килгән илап.
— Әле өмөт өҙөлмәгән, йәне бар,— тип,
Тәгәрәтәләр мулланы кейеҙгә урап.

Тәгәрәтеп ҡоҫторҙолар эскән һыуын,
Бер аҙ ғына шиңә төштө күпкән ҡарын.
Ат та егеп килтерҙеләр, яҫтыҡ һалып,
Теге егет үҙ йортона китте алып.

Алып ҡайтып өйгә кертеп яткырҙылар,
Йәне бар, тип һөйләшәләр, пыш-пыш итеп.
Үлеүендә мулланың һис ҡайғыһы юҡ,
Ғәмһеҙ генә йоклап ята, мыш-мыш итеп.



Бераү килгән: — Әҙерләгән инем аш, ти,
Исем ҡушмай ҡала инде, йәш балам,— ти.
Юрған асып, баш күтәрә мулла бабай:
— Ат егеп кил, Әхмәлетдин, мин барам,—ти.

Хәҙер ыҙба тыныс ҡалды, юк тауыш-тын,
Килгән халыҡ таралышты, аулаҡланды.
— Мулла бабай, был эш нисек булды? — тиеп,
Әхмәлетдин акрын ғына һорап алды.

Мулла бабай: «Әһе, әһем!» — тамаҡ ҡырҙы,
Күҙен ҡыҫып, ауыҙын йырып көлөп алды.
Нәфрәт ҡатыш тәьҫирләнеп үҙ фекеренә,
Башын сайкап һөйләй-һөйләй ойоп ҡалды.

— Арғы яҡҡа барырға тип сығып киттем,
Фәтхулла байҙы сирләгән тип ишеткәс;
Бер яуыз: «Мулла бабай, кил, мә!» — тиеп,
Ҡулын һуҙҙы, мин күпергә барып еткәс.

Дәшкәс барҙым шул кешенән хәйер алып,
Күпер аша арғы яҡҡа сығыр өсөн.
Теге яуыз күперҙең тактаһын алған,
Мыҫкыллап, ул мине һыуға йығыр өсөн.

Төшөп киттем тәрән һыуға мин баш түбән,
Торғанмындыр һыу эсендә ярты сәғәт.
«Кил, мә!» — тиеп алдап һыуға төшөрҙөләр,
Үлемемә була яҙҙы шулар сәбәп.

Һыуға төшкәс, әллә уйнап, әллә ысын,
Икеһе лә ҡысҡырыша: «Яҡын кил!» — тип.
Миңә аҡса, хәйер-фәлән биреү ҡайҙа,
Үҙҙәре минән һорайҙар: «Бир ҙә бир!» — тип.

Юлбаҫыусы кеүек яуыз әҙәм мине
Алдап, һыуға төшөрҙө бит үлтерергә;
Йән ғәзиз бит, һис үләһе килмәй икән,
Бына эсәм, имеш, һыуын бөтөрөргә.

Бераү әйтә, югер, тиеп, бик тиҙ генә,
Арба, яҫтыҡ һәм дә кейеҙ килтер, тиеп.
Арба егеү, яҫтыҡ, кейеҙ тип һөйләнгәс,
Уйлап ятам: «Ахры, ашка килдек»,— тиеп.

Әхмәлетдин ҡайтып китте ат егергә,
Абыстай ҙа һораштыра уның хәлен:
— Ниҙән былай мәсхәрәгә төштөң? — тиеп,—
Һөйләсе,—ти,—нисек булды һинең хәлең?

Оҫтабикәһенә мулла һөйләй иплән,
Сирләгән, ти, арғы яктың Фәтхулла бай,
Барайым тип кинәт кенә уйланым да,
Фидияһын * һорармын тип табып бер яй.

Әйтермен тип уйланым мин Фәтхуллаға,
Фидиянды биреп ҡул, тип, тереклектә;
Ауыҙындан йән сыкмаҫ борон фатиха ал,
Барлык малың кулда сакта, иркенлектә.

Яйлап кына әйтмәксе инем мин анарға,
Аҙғындар, тип, һинең барлык балаларың;
Таратып ҡл барлык малың якшыларға,
Динһеҙҙәргә калмаһын, тип, хәләл малың.

Фатиха ал, уғыл, кыҙға ышанма, тип,
Мин артыңдан доға кылып калам, тиеп;
Бирһәң кара айғыр менән бер һыйырың,
Бөгөндән ук гонаһыңды алам, тиеп.

Гүр саҙакаһына һорап берәр һарык,
Һарык бирһәң, гүр ғазабы тотмай, тиеп.
Бирмәгеҙ, тип, йәш муллаға бер нәмә лә:
Ала ла ул алдалай, көрьән сыкмай, тиеп.

Мин ҡлгәнсе, ҡлеп китеп шул Фәтхулла,
Булыр микән кара айғырыны тибеп?
Калмаҫ ине был донъяла кайғы-хәсрәт,
Сығып китһәм шул кара айғырҙы егеп!..

Атын егеп килеп етте Әхмәлетдин,
Арбаһына һалып, яҫтык, мендәрҙәрен.
Мулла бабай кейенде лә ашка китте,
Шунда бөттө минең дә кҡргәндәрем.

Тик шуныһын әйтеп ҡтәм, зикер * итең:
Мулла һыуға батһа, «бире кил», тимәгеҙ;
Йәне сыкканда ла ул, комһоҙланып,
Кулын һуҙыр, «мә» тиегеҙ, «бир» тимәгеҙ!

## АЛДЫНҒЫ КОЛХОЗ МЕНӘН ЭШЛЕКҺЕҘ КОЛХОЗ

Бер вакыт йөрөнөм уйлап колхоз эшен,
Тикшереп карайым уның төрлө төҫөн.

Ниңә һуң берeһе уның бик мул тора,
Кайһы берeһе көн-төн эшләй, уфыра.



Күп йөрөнөм мин шул уйҙарҙы уйлап,
Юл менән киттем сығып бер һыу буйлап.

Бер нисә тормош күреп йөрөр өсөн,
Колхоз эсендә ни бар — белер өсөн.

Бер нисә көндәр йөрөп юлда алйыным,
Туктаным ер һыу буйында, хәл йыйҙым.

Сәхрәһе бар, гүйә, Ленин баксаһы,
Баксаһында — нисә төрлө сәскәһе.

Ул, карап торһаң, ағас, урмандары,
Мул емеш, еләк менән тулған бары.

Кыскыра кәкүк, һайрай былбылы,
Сәхрә, урман баксаһында туп-тулы.

Баксаһында эшселәр [1] эшләй эшен,
Берһе бар — тәфтиш * итә һәр бер төшөн.

Кайһыһы йыя карағат, курай еләк,
Кескенә һауыт түгел,— тулған силәк.

Бар умарталыктары шул баксала,
Ташый бал корттары балды баксаға.

Йылғаһы бар, туғайында — күлдәре,
Күл тирәһендә сәскәле гөлдәре.

Еңел машина менән елдәй елеп,
Ике кеше баксаға керҙе килеп.

Корт караусының кырына барҙылар,
Шат күңел менән карап йөрөй улар.

Бар умартаeasilyларҙы тәфтиш иттеләр,
Автомобиль берлә кайтып киттеләр.

Ҙур комиссарҙармы ни — өҫ-баштары,
Бар егерме биш, утыҙҙа йәштәре.

Берһе — шул колхоз эше хисапсыһы,
Берһе — председатель, юлбашсыһы.

Ул пожарҙан һакланыу коралдары,
Нәк шәһәрсә, якшы тәртиптә бары.

Якшы тимерҙән яһалған арбалары,
Теүәл тора мискә, ухват, багорҙары.

Булған сбруйҙары ҡайыш менән,
Аттары ҡамытлы, баштарында ҡайыш югән.

Ҡаланса башында тора бер кеше,
Ут күҙәтеү — һәр даим уның эше.

Колхоз амбарҙары тулы ашлығы,
Барлыҡ амбарҙар өсөн бер башлығы.

Бар триер, сәскесе — яҙмайым барын,
Саф итеп таҙарта сәсеү фондтарын.

Тырма, һабан, күп сана һәм арбалар —
Яҡшы тәртип берлә ҡуйылған улар.

Һәр бер эштең бар үҙенә башсыһы,
Урыны менән бар һәр эштең һаҡсыһы.

Бында яҙған ғына түгел, был — кереш,
Тәртипле ҡоролған бында һәр бер эш.

Баҫыу ҡырҙарында эшләй эшселәр,
Үҙ араһында уның тәртипселәр.

Бындай ҡоролош — хөкүмәт юлы ул,
Ул дөрөҫ юл, һәр кем өсөн тура юл.

Ятмай йоҡлап һис уларҙың башлығы,
Йәйен, ҡышын бөтмәй емеш һәм ашлығы.

Эштәрен тәртип менән ҡорған өсөн,
Эшселәр ҡыҙғанмай эшләй үҙ көсөн.

Үҙ эшен белеп тыныс йәшәйҙәр улар,
Ни теләһәләр, шуны ашайҙар улар.

Һәр береһе белә үҙенең эшене,
Ҡушмайҙар көсләп олоно һәм кесене.

Эште эшләйҙәр улар тәртип менән,
Үҙ-ара сыҡмай улар тәнҡит менән [2].

Тәнҡит өсөн юҡ урын бер ерҙә лә,
Беркетелгән эш ҡатын-ҡыҙ, иргә лә.

Һәр бере үҙ эшен эшләй ҡушҡанса,
Баштары ҡуша сигенән уҙмайса.

Аппаратта артыҡ эшсе тапмаҫһың,
Юҡ исемгә алданып тик ятмаһын.



Эшләп ашай унда булған эшселәр,
Көн дә ос көн [3] эшләйҙәр көплоксоләр.

Шул сәбәпле тук улар һәм өҫ бөтөн,
Һәр ваҡытта улар өсөн яҡты көн.

Бер генә түгел минең йөргән ерем,
Яҙып үтәм бында мин ундан берен.

Мин был урындан күптәрҙе уйлап,
Ҡуҙғалып киттем тағын һыу буйлап.

Күҙҙәремде мин һаламын алғараҡ,
Тағын алда ни күреремде ҡарап.

Юлда ҡундым, бер ауылда йорт һорап,
Килде янға ос кеше паспорт һорап!

Ул өсәүҙең күҙҙәре тонған ине,
Баштарына тиле ҡош ҡунған ине.

Бәйләнәләр: «Һин ҡайҙан килдең? — тиеп,—
Ниңә был йортҡа килеп төштөң?» — тиеп.

Алып уҡып документте күрҙеләр.
«Беҙгә һин бер поллитрлыҡ бир!» — тиҙәр.

Һуғыу, аяҡ тибеүгә иҫ китмәне,
Аҙаҡ улар ҙа үҙ эшен ипләне.

Ике литрҙы алып ултырҙылар,
Ыстаканға һалып тултырҙылар.

Бер нисә рәт алып эскәс ҡоторҙолар,
Ҙур начальник, бик белемле булдылар.

«Кем икәнен һин беләһеңме?» — тине,
«Ошо ауылға персидатель мин!» — тине.

Береһе — колхоз председателе икән бында,
Икенсеһе — хисапсыһы икән шунда.

Көн дә эсеүҙәрен һөйләп маҡтандылар,
Иген урлауҙары менән шатландылар.

Ҡыҙғаныс хәлдә был колхоз тормошо,
Партия ҡушҡанса түгел ҡоролошо...

8 Заказ 144

Эш башында булһа уңған бер кеше,
Вакытында эшләнә барлык эше.

Эш башында торһа бер туңған әҙәм,
Сәскән ашлык — бар уңыш була әрәм.

Артта калһаң, алдағынан өлгө ал,
Ятма йоклап, һин тырыш та алға бар.

Алға барһак, беҙ табырбыҙ яктылык,
Бул намыҫлы, эшлә эш алдын булып.

Нисә ерҙә миллионер колхоздар бар,—
Бар ҙа беҙ кеүек әҙәм балаһы улар.

Миллионер тип, донъяға сыккан даны,
Бар етәксе, юлға һалыусы уны.

Донъя — якты! Ас күҙеңде, күрмәһәң,
Кыҙғал әҙерәк, йәнле көйгә үлмәһәң!

### 1939 ЙЫЛДЫҢ 1940 ЙЫЛҒА ДОКЛАДЫ ҺӘМ ВАСЫЯТЫ

Мин йыл инем. Тарих ағымында бары бер йыл.
Өс йөҙ алтмыш биш көн. Килеп китмәй ниҙәр.
Якшылыкты эшләп китһәң, һәр кем мактар,
Яман булһаң, яман тип, һәр кем һөйләр.

Тукталмайбыҙ беҙ бер касан бер ерҙә лә,
Беҙ — күсеүсе, беҙ — барыусы, беҙ — уҙғынсы.
Мин килмәнем башлап донъя һарайына,—
Бер мең туғыҙ йөҙ ҙә утыҙ туғыҙынсы.

Был хисап та — һуңғы хисап, бик йәш кенә:
Рус халкының алла тигән Ғайсаһынан,
Тәре яһап казакланған бер ағаска,—
Йыл башы тип хисапланып калған шунан [1].

Унан элек үткәндәре мәғлүм түгел,
Һанап белгән һис кеше юк. Миллион йылдар.
Үткәндәге булған эште тарих итеп,
Кулдан-кулға алып килгән беҙгә шулар.

Унан элек килгәндәрҙең хәлдәрене
Белмәйем мин: илдә нисек йәшәгәндәр,



Ниндәй хеҙмәт күрһәткәндәр ил халкына,
Ни биргәндәр, ни алғандар, пешләгәндәр.

Кайбер йылдар алып килеп ер-һыуҙарҙы
Баярҙар һәм алпауытка өләшкәндәр.
Кайберҙәре тартып алып алпауыттан
Эшсәндәргә биреү өсөн көрәшкәндәр.

Кайбер йылдар Париж коммунаһын
Алып килгән коллок бауын өҙөр өсөн.
Кайберҙәре эшселәрҙе юнәлдергән
Батшаларға каршы, туплап барлык көсөн.

Мең һигеҙ йөҙ ун һигеҙенсе йыл, етәкләп,
Карл Маркс карт даһиҙе килгән алып.
Коммунизм юлбашсыһы халыктарҙы
Сакырған берләшергә көстө туплап.

Хөрриәткә юл күрһәткән иҙелгәнгә,
Палачтарҙың йәберләүен иҫкә алып.
Карл Маркс Ленингә лә остаз булған,
Донъялыктың закондарын тәрән асып.

Мең һигеҙ йөҙ етмешенсе йыл апрелдә
Балкып тыуған был донъяға ер кояшы,
Шул кояштан азатлыктың нуры балкый:
Ленин Ильич — Ер шарының бер кояшы.

Мең һигеҙ йөҙ етмеш бишенсе йыл килгән,
Калининде алып илгә рәислеккә.
Ленин Ильич васыяты буйынса ул
Хеҙмәт итә егерме йыл [2] ил түрендә.

Мең туғыҙ йөҙ ун етенсе
Коллок сылбырҙарын өҙҙө Рәсәйҙә.
Октябрҙә ирек яулап, хокук алып,
Иркен йәшәй дуҫ халыктар СССР-ҙа.

Мең туғыҙ йөҙ утыҙ алтынсы йыл
Алып килде беҙгә ҙур китап [3]:
Тын океан диңгеҙенән ул киңерәк,
Бөтөн донъя хәжәтене алған йыйнап.

Ул китаптың йөҙ кырк алты тармағы [4] бар,
Тармак һайын меңәр төрлө япрағы бар.
Бөтөн булған ер шарына канун булып,
Бер вакытта бөтөн донъя шунда карар.

Ир-катынға берҙәй тигеҙ хоҡуҡ биргән,
Ҡоллоҡ сылбырҙарын алған бөтөн илдән,
Батша ла юҡ, бер кем һине йәбер итмәй,
Хөкүмәтте һайлай халыҡ — торған ерҙән.

Унда уҡыу, дарыулаңыу һәм хәл йыйыу
Курорттарҙа, больнистарҙа — хаҡһыҙ бар ҙа.
Хеҙмәт хоҡуғы таратыла һәр кемгә лә,
Пенсия ала, алтмыш тулһа, ҡайһыһы ла.

Мин—мең туғыҙ йөҙ утыҙ туғыҙынсы,
Күп эшләнем, туҡтаманым бер минут та,
Минут түгел, хәл йыйманым бер секунд та.
Дарьяларға төштөм, батмай сыҡтым аша,
Ятманым мин, сыҡтым иҫән, керҙем утҡа.

Совет илен таныттырҙым күп ирҙәргә,
Ҙур ҡалалар һалдырҙым мин күп ерҙәрҙә,
Илселәрҙе алып килеп Калинингә
Дуҫлыҡ яҙыу * яҙыштырҙым сит илдәргә.

Васыятым ҡыҫҡа ғына әйтеп китәм,
Бөтә эште намыҫ менән эшләнем мин.
СССР-ҙың дошмандарын юҡҡа сығар,
Һөйләр өсөн мәңге ҡалһын даның һинең.

Барлыҡ фәҡирҙәрҙе азат ит һин,
Күрмәһендәр, тимен, улар һис тә ғазап.
Ҡорһон улар иркен тормош, йәмле колхоз,
Ер шарында Совет илен күҙгә яһап.

Социалистик баҫыуҙарҙа уңды иген,
СССР-ҙың дошмандарҙан һаҡла сиген.
Нәжис * йәндәр кереп илде бысратмаһын,
Совет илен — сәскә атҡан нурлы ерҙе.

Колхоз-совхоздарҙың һаҡла малдарыны,
Сит илдәргә тарат совет дандарыны,
Капиталды тар-мар итеп ер йөҙөнән,
Утҡа үртә фашистәрҙең йәндәрене.

Иген сәскәс, яуҙыр ергә ямғырыңды,
Үҫемлектәр бирһен уңыш, яҡшы йылыт.
Ҡартайғандар бил яҙһындар, ә балалар
Сыныҡһындар һыуҙа йөҙөп, нурҙа ҡыҙып.

Һуңғы һүҙем — васыятым ошо һиңә.
Инде хәҙер, һау бул, тиеп бирәм ҡулым.



Бар халыҡҡа минән сәләм, һау булһындар,
Үҙем totam мәңгелеккә сәфәр юлын.

Мин бер мең дә туғыҙ йөҙ ҙә ҡырҡынсы йыл,
Тыңлап доклад, ҡабул иттем васыятың.
Капиталды бөтөрөргә бирәмен һүҙ,
Әйткәнеңдән арттырырға бар ниәтем.

Сәскә атҡан СССР-ға ҡанат йәйеп,
Дүшәмбе кон ярты төндән аяҡ баҫтым.
Сын социализм ҡоролоп ер шарында,
Минең янға дуҫ йыйылһын, дошман ҡасһын.

## ШИҒЫРҘАР

### МИН ЙЫРЛАЙМЫН

*(1913 йыл, сентябрь ядкәренән)*

Мин йырлаймын белеп түгел, белмәйенсә,
Белеп булмай әҙерәк кәйеф килмәйенсә.
Насар тип, дуҫтар, йырым хурламағыҙ,
Бер уҡып сыҡ, йырлауҫынан көлмәйенсә.

Мин йырлаймын, шиғырҙарым тулғас эскә,
Күренһендәр, ятмаһындар, тиеп, эстә.
Йыр ҡапсығы тулғас, урын табалмайсы,
Йырламайсы ҡундым инде үткән кистә.

Мин йырламаймын, йырым йырға оҡшаһын тип,
Мин йырлаймын, әҙерәк эсем бушаһын тип.
Башҡорт, татар артта ҡалыу хәсрәтенән
Уйҙар менән тулған эсем бушаһын тип.

Мин йырлаймын, шул тау өҫтән китмәгәнгә,
Ҡотҡарырға дуҫтар йәһәт килмәгәнгә,
Туҡай меҫкен хәсрәт сигеп башын юйҙы,
Тауҙар китеп, шатлыҡ көнгә етмәгәнгә.

Мин йырлаймын, уйлап уйҙар етмәгәнгә,
Шағир йырлай, милләт алға китмәгәнгә.
Сит милләттәр тауыш-тынһыҙ китеп бара,
Иттифаҡ * берлән юлдарын иплəгəнгə.

Белмәймен, беҙҙең юлдар ипләнерме,
Башҡорт, татар ҡоллоҡ менән этләнерме?
Шатлыҡ күрмәй, бәхет ҡошо осоп китеп,
Өмөт юлы ғүмерлеккә бикләнерме?

Өҙмәйем өмөт, сулпан ҡалҡыр, таң таңатыр,
Килер бер көн, сыраҡтарҙы яҡын таратыр.
Шул таң менән уяныр башҡорт, татар,
Көрәш майҙанына керер бик күп батыр.



*1914 йыл ядкәренән*

Башҡорт, татар, тәндә бармы һинең йәнең?
Һин йоҡлайһың, ҡара ҡоштар эсә ҡаның.
Наҙан ҡалып, ҡол булдығыҙ вәхшиҙәргә,
Терек булыуыңдан артыҡ юҡ булғаның.

Оятһыҙ хандар һеҙҙе йығып тапанылар,
Күҙегеҙгә ҡара пәрҙә ҡапланылар.
Бирелмәне уҡыу осон һеҙгә хоҡуҡ,
«Отсталый милләт» тиеп атанылар.

Ике күҙгә хужа булып һеҙ торҙоғоҙ,
Улар хужа булды,— һеҙ ҡол булдығыҙ.
Ике арала әҙәмселек бер булһа ла,
Наҙан булып, һеҙ донъяла хур булдығыҙ.

Ауыр йөккә егелдегеҙ хайуан төҫлө,
Ҡыҫыҡ ғүмер иттегеҙ һеҙ, иркен тыуып.
Беҙ ҙә әҙәм, тиеп, хаҡлыҡ һорар осон,
Юҡ ихтыяр, улар муйыныӊ тотһа быуып.

Шулай ҙа бит быуған ҡулдар бер көн талыр,
Ихтыярһыҙ муйындан ҡулын тартып алыр.
Күҙен асып ырғып торор татар, башҡорт,
Таң яҡтырыр, алға нурлы юлдар һалыр.

### ВЛАДИМИР ИЛЬИЧ ЛЕНИНДЕҢ ДОНЪЯНАН КҮСКӘНЕН ИШЕТКӘН КӨНДӘ

#### I

Ҡара урман эсендә ҡара төндә
Башҡорт, татар— һуҡыр эсе төтөнгә.

Ҡамап алған тирә-яҡты арыҫлан,
Имен түгел бер әҙәм юлбарыҫтан.

Килеп сығып был ваҡыт бер ҡаһарман
Халыҡтарҙы ҡотҡарған ҡәһәрҙән.

Яһап юлдар ошо ҡараңғы төндә,
Фәҡирҙәрҙе сығарған яҡты көнгә.

Фәҡирҙәр юл табып эш башланылар,
Туҙан-керҙәрҙе ҡағып ташланылар.

Татар, башкорттар ҙа атланы алға,
Муафик * күренә күп эштәр заманға.

Шулай ул зат ҡояш булып ҡалкты,
Бөтә ер шарына үҙен танытты.

Баҫып тауға, юғары һуҙҙы ҡулын,
Һуҙып уң ҡул менән күрһәтте юлын.

Нисә йәшрен урынға ҡуйҙы билдә,
Тигеҙ хоҡук биреп ҡатынға, иргә.

Кеше көсөн ашау, тине, хыянат,
Әҙәм талаусылар күрҙе ҡиәмәт.

Бөтөн кулак, фәҡирҙәр синыфы үҫте,
Үтеп кондәр, был ҡояш инде күсте.

Беләһеҙме ҡояш нисек ҡалкканын,
Был донъяға нуры нисек балкығанын?
Әйтеп исемен, тарихкә мин теймәймен:
Владимир, фамилияһы булды Ленин.

## II

Иҫте бер ел, сәхрә, тау, таш һәм сүлдәрҙе сайканы,
Шул вакыт ер, күк зарынан тамды йөрәктең ҡаны.
Китте, ти, был донъянан эшсе, фәҡирҙәр рухының
Мәңгелек ҡайтмаҫ урынға мәғнәүи бер солтаны.

## III

Саба еле һөйләй бер һүҙ күңелһеҙ:
Уғлы-ҡыҙы — бөтә ил ҡалды үкһеҙ.

Бына шунда өмөт ебе өҙөлдө,
Күңелгә ҡайһы бер уй һибелде.

Был ҡайғы ҡапланы күңелем ҡояшын,
Күҙемдән түкте биткә ҡайғы йәшен.

Яна йөрәк, ҡаҙан дик * ҡайнай эстә,
Бөтә донъя уты тулған тик эскә.

Был хәсрәтте табиптәр шиңдерә алмай,
Бөтә дарья был утты һүндерә алмай.

Ҡояш нурһыҙ, караңғы төҫлө ай ҙа,
Ҡәләм һынған, илау ҙа итмәй файҙа.



Һаман һүнмәй яна йөрәк төтөнһөҙ,
Был ҡайнар йәш тә эсе, үҙе керһеҙ.

Әсе йәш татлы булды тошкәс утка,
Булып бер нур хәлен үҙгәртте утта.

«Был ниндәй ут, был ни хәсрәт?» — тигәнгә
Ике юлда булыр яуап түбәндә:

Янып көймәҫ йөрәктәр бер ҙә юкка —
Ленин үлгән тигән һүҙ һалды утка.

Бөтә фәҡир синыфының рәһбәре * ул,
Вакыт етмәй юйылған кәүҫәре * ул.

## ВАҠЫТ

Ваҡытты һин, кәҙерен белеп, бик нык һаҡла,
Алтын, көмөш, мал табыла вакыт менән.
Акыл менән ваҡыт — улар ҡиммәт нәрҫә,
Һатып алып булмай гәүһәр, якут менән.

Ваҡыт, аҡыл менән табыла ҙур белемдәр,
Аҡыл, ғилем — икеһе улар — игеҙ бала.
Белемлекте дәғүә ҡылған наҙан, юләр
Ике аяклы хайуан бит ул был донъяла.

## БӘХЕТ

Кем бәхетле был донъяла, уйлап торһаң,
Батшалармы, фабрикант йә миллионермы?
Бадишалар — ҡан түгеүсе, фабрикант — бур,
Юл баҫыусы палач тибеҙ миллионерҙы.

Иң бәхетле кеше тибеҙ был донъяла
Халыҡ өсөн фиҙа ҡылған йәнен-тәнен,
Хеҙмәт итһә үҙ халкына намыҫ менән,
Акыл йәмен, ғилеменең белһә йәмен.

## НИСЕК ҠАРАП КҮРЕҮ АРТЫҠ

Күңел күҙе менән күреү артыҡ
Маңлай күҙе менән күреүҙән.
Иркен ерҙә тороп илаҙу артык
Тотконлокта тороп көлөүҙән.

### КЕМГӘ НИСЕК

*Рабочий конь солому ест*
*А пустопляст—овес.*
*Н. Некрасов*

Эшсе, меҫкен, туры алаша, һабан һөрә,
Бата-сума юлдан ауыр йөктәр ташый.
Барған ерҙә кон буйына — ас һәм һыуһыҙ,
Йортҡа боролоп ҡайтҡандан һуң һалам ашай.

Юҡҡа бейеп торған беҙҙең ҡара айғыр
Алдында йәшел бесән, һоло ашай.
Бер эш юҡ айғырға, егелмәгәс,
Аптырауҙан бағанаға артын ҡашый.

### ҠАЙҺЫҺЫ АРТЫҠ

Күкрәк көсө менән малды тапҡан
Уңған егет булып һанала.
Аҡыллыға һанайым мал табыуҙан
Әрәм итмәй малды һаҡлауҙы.

### БАҺА БИРЕЛӘ

Бер кешенең кон күреше һәм ғүмере өсөн
Тыш яғына ҡарап баһа биреп булмай.
Баһа бирелә эшләгән эш һәм аҡылға;
Аҡылһыҙҙы ил ағаһы тиеп булмай.

### ХӘСРӘТ ҠАСАН БӨТӘ

Ер шарында хөрлөк, ҙур ғәҙеллек,
Үҫә барған һайын тигеҙлек,
Яҡтырып нур сәсер изге тормош,
Бөтәр хәсрәт, килер иркенлек.

***

Килә ҡай саҡ ыласын ҡоштарына
Тауыҡтан да түбәнгәрәк төшөргә;
Насип булмай тауыҡҡа бер ғүмер ҙә
Һауалағы болотҡа дик осорға.



## НӘБИ ҒӘҘЕЛБАЕВ

### АҒЫУЛЫ ОРЛОҠТАР ЙЫРЫ

Кемдәр төҙөгән икән
«Йондоҙ» әртил нигеҙен?
Кемдәр, кемдәр һатҡан икән
Ағыулы орлоҡ игенен?
Ағыуланған игенде
Кемдәр һатҡан йәшерен?
Урман халҡы һиҙмәгән
Был ҡараҡтарҙың серен.
Ағыуланған әҙәмдәр
Илле йәнгә еткәндәр;
Рәхмәт инде докторҙарға
Улар ярҙам иткәндәр.
Бер нисәһе ваҡытһыҙ
Был донъянан киткәндер;
Уйламағыҙ, иптәштәр,
Был эш шулай бөткәндер.
Беҙҙә Совет власе
Хаҡһыҙлыҡты тикшерә,
Ундай ҡара эштәр менән
Ҡаты хөкөм эш күрә.
«Ижтиһадлы» * колхоздың
Орлоҡтары етмәгән,
Әллә орлоҡ етмәгәнгә,
Улар сәсеп бөтмәгән.
Сәсмәй ҡалған орлоғо
Ун биш боттар бар икән,
Шул орлоҡто сәсергә
Әллә ерҙәр тар микән?
Был орлоҡто кәрәк ине
Ергә сәсеп бөтөргә,
Ун биш боттан 150 бот
Тейеш ине көторгә.
Ул орлоҡто сәсергә
Әллә ерҙәр ташлымы?
Орлоҡ урлап, йәшереп ҡалыу

Хөкүмәткә яҡшымы?
Әй иптәштәр, орлоҡто
Формалинлап йыумағыҙ,
Йыумағыҙ, тип мин әйтмәйем,
Ғөмәр көүек булмағыҙ.
Фамилияһы Әүбәкиров,
Ҙур кешегә оҡшайҙыр,
Был насарлыҡ эшләүенә
Бер ҙә эсе бошмайҙыр.
Кемдәр ҡайҙан белһендәр
Башҡа килер ҡазаһын.
Кемдәр быны эшләгән,
Шулар тартһын яҙаһын,
Бына һеҙгә орлоҡтоң
Хикәйәтен башлайым,
Ағыуланған кешеләрҙең
Ауыр хәлен фашлайым.
Лоҡман ҡарт Йомаштан
Барған икән Юлыҡҡа,
Бер бот он биргән кешегә
Ингән, бахыр, ҡоллоҡҡа.
Лоҡман ҡарт алып ҡайтҡан
Ағыуланған игенде,
Ҡайтыу менән бешерергә
Ҡушҡан, бахыр, киленде.
Ағыуланған игендән
Килен һалма бешергән,
Бисаралар белмәйенсә
Табаҡтарға төшөргән.
Ас халыҡтар асығып
Шул һалманан эсенгән,
Иртән тороуға туғыҙ йән
Барыһы берҙән шешенгән.
Әбей әйтә бабайға:
Шешенгәнһең бабаҡай.
Бабай әйтә әбейгә:
Үҙеңде бел, ахаҡай.
Ниңә һин, тип, ниңә һин, тип,
Әбей-бабай талаша.
Шул ваҡытта туғыҙ йән
Барыһы берҙән шаулаша.
Лоҡман ҡарт боронғоса
Бара икән юл менән,
Һеперең ташламаҡсы булған
Был ауырыуҙы ҡул менән.
Лоҡман ҡарт һаман ҡараған
Боронғоса йоланы,
Ул Сыңғыҙҙан саҡыртҡан
Ғәйнулланы-мулланы.



Ағыулаған игенде
Ултыртҡан ул келәткә,
Бер аҙыраҡ мал төшә, тип
Мулла китә теләктә.
Йәшерен генә мулла килә
Туғыҙ йәнде өшкөрә,
Арлы-бирле өшкөрөп,
Ун ҡаҙаҡ он төшөрә...
Ағыуланған орлоҡ онон,
Ул төшөргән ҡулына,
Бер аҙ мал төшөрҙөм, тип
Юнәлә ул юлына.
Ғәйнүш мулла алып ҡайта
Ағыуланған икмәкте;
Рәхмәт уҡый, үҙе белмәй
«Йондоҙ» ҡорған хикмәтте.
Мулла алып килгән ондан
Әбей һалма бешерә,
Шул һалманан мулланың
Бар өй эсе шешенә.,
Мулла, йөрәк сыға, тип
Югереп сыға келәткә,
Ҡаймаҡ һалған һауытты
Элеп ала беләккә.
Мулла менән абыстай
Тирләп ҡаймаҡ бешәләр,
Ҡаймаҡтан сыҡҡан айранды
Бирән көүек эсәләр...
Теймәһә лә өшкөрҙөк
Бер шифаһы ағыуға;
Яҡшы бел, өшкөрөп
Ун ҡаҙаҡ он алыуға.
Мулла, мулла тимәгеҙ,
Муллаға юл бирмәгеҙ.
Бынан кире өшкөрөү-
Төкөрөүгә йөрөмәгеҙ.
Беҙҙең тормош ҡоролған
Ғилем-фән нигеҙенә;
Һеҙ теймәгеҙ колхоздың
Ағыуланған игененә.
Әүбәкиров Ғөмәрҙе
Сығармағыҙ хәтерҙән,
Иртәгеһенә уйлағыҙ,
Йоҡо алдында ятырҙан.
Илле кеше Совет өсөн —
Илле йөҙлөк әрмейә;
Әүбәкиров Ғөмәр өсөн
Тороп-тороп йән көйә.
Атһаң — әрәм йәҙерә,

Һукһаң — әрәм кул көсө;
Ниндәй намыҫ менән йөрөй
Ер йөҙөндә был кеше?
Бөгөн яҙған хикәйәтем,
Әкиәт түгел — күҙ йәше.
Шундай эштәр аркаһында
Харап була ир башы.
Илле таҙа ир егет
Бөгөн сафтан сығалар,
Уларҙың өй эстәре
Ҡан йәштәрен һығалар.
Ғөмәр кеүек йән ҡыйырҙы
Суд алдына ҡуйығыҙ,
Илле йәнде ағыулаған
Бер контрҙы юйығыҙ.

## ҠАЛДЫҠТАР

Асыу килә, иҫкә төшһә үткән саҡтар,
Ул саҡты тик муллалар, байҙар маҡтар.
Бөгөнгөнө яҙырға мин яратам:
«Үткәндән төш яҡшыраҡ»,— тиҙәр ҡарттар.

Яҙғаным — төш түгел, булған факт,
Ул факт ҡалмаһын, тим, ерҙә ятып.
Партиям шулай ҡушҡас, асып һалам,
Бер дошман ала алмаҫ мине һатып.

Шундайҙар бар: тыштан яңы булһалар ҙа,
Эс яҡтан бик алыҫ киткәне юҡ.
«Беҙ шулай!» — тип лаф ороп йөрһәләр ҙә,
Баштарында иҫке аңы бөткәне юҡ.

Күршеһенән йәшереп сәхәр ашай,
Шулайтып кергән була уразаға;
Ирем башка бисәне һөймәһен тип,
Бисәһе йөрөгән була күрәҙәгә.

Труддингә эшләп алған бойҙайынан
Муллаға фытыр итеп тапшыралар.
Беҙҙең фекер уларға дошман булған,—
Иҫке ғәҙәт, иҫке дингә баш оралар.

Фытыр алған мулланы кисә күрҙем,
Йыуан итеп махорканы төрөп алған;
Күрәһең, йыйған фытыр аҡсаһына
Шаҡтай ғына «тахил шарап» төшөрөп алған.



Кулак улы Камал менән гөрләшәләр,
Үткәндәрен һағынышып серләшәләр.
Ҡайһы бер колхозсының аңһыҙлығын
Файҙаланып ҡалыу өсөн берләшәләр.

Ул жуликтәр һаман әле колхоздарҙа
Ҡараңғы моменттәрҙән файҙалана.
Жуликтәрҙе тотмағыҙ һеҙ арағыҙҙа,
Ҡыуығыҙ Мәскәү — Волга каналына!

Иҫкелекте ташлағыҙ һеҙ елкәгеҙҙән,
Өйрәнегеҙ Ленин бабай һабаҡтарын:
Колхозсыға бик ҙур оят, бик ҙур оят
Йокмәп йөрөү иҫке тормош ҡалдыҡтарын!

# ХӘЙРУЛЛА ИШМУРЗИН

## СОВЕТ ИЛЕ ХАҠЫНДА

Һауаларҙан килгән ыласын
Йәйеп кенә килә ҡоласын.
Гөрләп үҫкән беҙҙең Тыуған илкәй,
Мең йәшәһен Совет власе.

Иртән дә генә тороп мин ҡараным,
Йәшәреп тә күренә тау башы.
Бөтә халыҡтарҙы ҡыуандырҙы
Бөйөк Ленин — беҙҙең юлбашсы.

Яҙ көндәре аҫыл сәскә ата
Баҡсамдағы алһыу гөлкәйем.
Сәскә кеүек алһыуланып үҫһен
Йәндән артыҡ Тыуған илкәйем.

Алыҫ юлды үтеү ауыр түгел,
Менгән атың югерек, көр булһа.
Ҡайҙа ғына барһа, кәм булмай ул,
СССР-ҙа тыуған ир булһа.

Урман ғына буйы ай күк үлән,
Колхоз аткайҙары ашаһын.
Ҡатын-ҡыҙға тигеҙ ирек биргән
Совет власкәйе йәшәһен!

Ҡыйылып, ҡыйылып килгән күк ҡарсыға
Йәйеп кенә оса ҡоласын.
Ҡыҙғанмайбыҙ йәнде, түгербеҙ ҡанды —
Ебәрмәбеҙ ҡулдан власте!

Тимерле лә сана тирәкле,
Совет халҡы арыҫлан йөрәкле.
Совет халҡы шуға йөрәкле:
Партиябыҙ хаҡ юл өйрәтте.



## ҠЫҪҠА ЙЫРҘАР

Ултырабыҙ ҙа китәбеҙ,
Автобусты ат итеп.
СССР-ҙа беҙ йәшәйбеҙ,
Ҡояш кеүек ялт итеп.

Ала сыбар ал үрҙәк —
Ағиҙелдең һыуында.
Үлһәк, шунда үләйек беҙ —
Коммунизм юлында.

Әрәмәнең йәме юҡ,
Муйыл ағас булмаһа.
Уйындарҙың йәме юҡ,
Комсомолдар булмаһа.

Бейек тауға менгән саҡта,
Шишмәнән һыу эсәбеҙ.
Алға табан үҫәбеҙ ҙә
Коммунизмгә күсәбеҙ.

## ВӘЛИУЛЛА ҠОЛОМБӘТОВ

### ЯЛҠАУ МОТОЙ МЕНӘН ТАРАҠАНДАР

Борон-борон заманда бер ҡарт булған,
Эш билбауын биленә тағы быуған.

Бабайҙың йәш бисәһенән бер ул тыуған,
Был улының исеме ялҡау Мотой булған.

Бабай үҙе йәш сағында ярлы торған,
Йоҡлағанда ябынырға булмаған юрған.

Ҡарт, күп эшләп, байлыҡ менән бәхет тапҡан,
Тырышып эшләп, өҫтөнә юрған япҡан.

Эшләргә бабай үҙе яҡшы булған,
Яҡшылығы менән уның донъя тулған.

Малһыҙҙарға орлоҡ өсөн малдар биргән,
Игенһеҙҙең итәгенә борсаҡ тиргән.

Ҡарт донъяла күп эшләгән, күпте күргән,
Башҡаларға эше менән үрнәк биргән.

Эшһеҙ ятып бабай үҙе һис тынмаған,
Эшләмәй торған сакта йөрәге нык һыҙлаған.

Малдарын туйҙырып, бабай аҙбар көрәп тора,
Ялкау Мотой үҙ белгәнен был бабайға һөйләп тора.

— Етер, ҡарт,— ти,— күп эшләмә, ҡулың талыр,
Үлерһең, һинән малың тороп ҡалыр.

Ҡарт әйтә: «Донъяла етеҙлек даным ҡалһын,
Үлгәндән һуң халыҡ өсөн малым ҡалһын.

Иҫкә алырҙар етеҙлек даны менән,
Шатланырҙар ирҙең ҡалған малы менән».



Алтмыш йәштә ғүмере бөтөп, бабай үлгән.
Мал алырға туғандары килеп тулған.

Ҡарт үлеп, ялкау Мотой йәтим ҡалған,
Атаһынан ҡалған малды ҡулға алған.

Ялҡау Мотой үҫеп, егет булып етте,
Эшләмәгәс, ҡулынан бер ҙә ҡалмай бәхет китте.

Әсәһе әйтә: «Балам, Мотой, ҡулыңдан бәхетең китте,
Бәхет эҙләп табырға һиңә инде ваҡыт етте».

Бәхет бөткәс, мейе төңөп, йөрәк һыҙлап,
Мотой менде мейес башына бәхет эҙләп.

Мотой күрҙе: мейес башында ишәйгән тараҡандар,
Иҫкә алды тота белмәй малдарын таратҡанды.

Мотой менеп мейес башына һуҙылып ятты,
Өҫтөнә иҫке ҡатҡан тунын япты.

Мейес башында тараҡанға, епкә баулап, икмәк элде,
Миллионлаған тараҡанды ялҡау Мотой бәхет күрҙе.

Мотой мәшһүр ялҡаулыҡ исемен алды,
Бәхет тиеп тараҡанды, шунда ҡалды.

Ялҡауҙарға мейес башында булған тәхет,—
Халыҡтарға тараҡандар түгел бәхет.

### ИПТӘШКӘ

Бара торған һәр юлыңда дошманыңдан көртә бар,
Меңгән атың саптарыңды тоғро юлға тарта бар.
Төрлө яҡҡа күҙ һалып бар, китмә һин юлдан сығып,
Ҡыҫҡараҡ тот теҙгенеңде, китмәһен өркоп, йығып.
Юрғалатып саптарыңды, юлда туҙан туҙҙырып,
Тиҙ етәрһең маҡсатыңа, башҡаларҙан уҙҙырып.

*1923*

### ҮТКЕР БАЛТА

Балта үткер — үҙенә һап яһай алмай,
Ҙур-белемле ирҙәр ҙә кешеһеҙ йәшәй алмай.
Берлек кәрәк донъябыҙҙа тереклек өсөн,
Ҡүмәкләгән яу ҡайтарған шуның өсөн.
Берләшкән әҙәмдәрҙе бүре алмай,
Тормошоң алға китһә, дошмандарың күрә алмай.

*1949*

# ФӘРРӘХ ДӘҮЛӘТШИН

## ҮТКӘН ҒҮМЕРЕМ

Фәррәхтең тыуған йылын һораһағыҙ —
1887 йылда тыуған бала.
Шул ваҡытта алтмыш йәшендә булған атай,
Ун ете йәшендә булған әсәй.
Ун ете йәшендә әсәй атайға
Дүртенсе ҡатын булып килгән.
Атайҙың ҡарт икәнен дә белгән,
Үҙе риза булмаһа ла,
Аға-энеһе тотҡан да биргән.

Минең атай күпме ғүмер иткән?
Уға оҙаҡламай ваҡыт еткән:
Әсәйҙе алғас,
Биш йылдан һуң үлгән дә ҡуйған,
Үлгәс, әлбиттә, ергә күмелгән.
Әсәй, етем ҡалып,
Бик күп нужалар күргән.

Шулай итеп, атайҙан мин
Өс йәштә етем ҡалып,
Еңгә ҡулында үҫтем.
Етем ҡалғас, нишләйһең,
Төрлө һыуҙар ҙа эстем.
Өҫкә-башҡа булманы,—
Сығып утын да киҫтем.

Биш йәшемдә бишек тирбәттем,—
Етем баланың ҡәҙере юҡ ул ваҡытта:
Ағайҙан да тиргәлдем,
Еңгәнән дә тиргәлдем.

Алты йәшемдә атҡа атландым,
Үҙ күңелемдә үҙем күреп шатландым.
Шул ваҡытта бер байға тырмаға барҙым.
Бай нәмә бирһә, шуны алдым,
Бирмәһә, алмай ҙа ҡалдым.



Әсәй китте ташлап йәш иргә,
Мин ҡалдым тороп яфалы илдә.
Өҫкә кейем булманы,
Йөрөнөм туңып һалҡын елдә.

Ете йәшемдә еләк йыйҙым,
Еләк ашап, еләп туйҙым.
Ашап бөтөрөп булманы,
Ҡалғанын силәккә һалып ҡуйҙым.

Һигеҙ йәштә һыйыр көттөм,
Һыйыр артынан йөрөп, арып бөттөм.

Туғыҙ йәштә сабата туҡыным,
Сабата аҡсаһын үҙемә ҡалдыра барғас,
Ағай-еңгәнән ҡыуылдым.

Ун йәштә урманға барҙым,
Бер байға утын ташып,
Көнөнә ун тин аҡса алдым.

Йәшем етте ун бергә,
Киттем уҡырға Бөрөгә,—
Ул ваҡытта етем баланы
Уҡырға алмайҙар икән бер ҙә,
Шул сәбәпле
Наҙан булып уҡымай тороп ҡалдым.

Йәшем етте ун икегә,
Керештем бер ауылда көтөүгә.
Көтөү көтөүе бик ауыр,
Аҡсаһын да булмай юнләп алып.
Өҫтөмдә ҡыҫҡа ғына бер соба,
Теләһәң генә нисек сыҙа.
Әгәр ҙә бер бәрән ҡайтмай ҡалһа,
Халыҡтар ҙа тиргәп сыға.

Шундай кескәй генә сағымда
Юҡ ярҙамсым янымда.
Аптырап ҡышҡы көндә
Керҙем бер байға
Айы тәңкә ярымға.
Бай ҡушты утын ярырға,
Көс тә етмәй күтәреп алырға.
Инде белмәйем ҡайҙа барырға?

Бай ебәрҙе һаламға,
Ектем атты санаға,—
Санаһы бик алама,

Только өс кенә ҡарама.
Ат саба, сана тарала,
Фәррәх шунда ауып ҡала.
Йығылып төштөм ҡарға,
Үҙеңдең көсөң етмәгәс,
Ышанма икән малға!
Нисек итһәм иттем,
Ярҙы менеп киттем.
Аттың артынан югереп барып еттем.
Барып керҙем ындырға,
Керештем сыбыҡ һындырырға,
Атты һуҡтырырға.

Шулай итеп, мин кескенә сағымда
Эште бар тип тә белмәнем.
Бай тиргәр әле тип ҡоймәнем.
Санаға һалам тейәнем,—
Ҡайтҡас, бушатып та оймәнем!

Бер аҙҙан һуң ҡуша бай һалам бушатырға,
Етмәһә тағы атҡа башаҡ болғатырға.
Нишләйһең, һаламын да бушаттым,
Атҡа башағын да болғаттым.
Кереп ашарға әле ваҡыт та юҡ!
Топ тә ваттым, мунса ла яҡтым...

Шулай байҙа эшләй торғас,
Һалҡын тейеп,
Ун биш көн сирләп тә яттым.
Бай, сирләгәс, эшләтмәҫ булды.
Аптырап илап, өйгә ҡайттым.
Хәҙер йәшем етте ун өскә,
Юнләп эшләргә етмәй әле кос тә.
Киттем Кащеев баярына эшкә,
Петр Григоричкә.
Ун тин бирә көнлөккә,
Үҙе ҡуша конюхлеккә.
Өйгә ҡайтып йоҡлап булмай,
Шул тирәлә генә ятам, синлектә.

Йәшем етте ун дүрткә,
Бәхетем юҡ икән бөртөк тә!
Шул баярға ат котоп йөрөгән саҡта,
Абынып йығылдым бер топкә.
Топ осло булған, тәнем тишелде,
Әйтерһең, бысаҡ менән киҫелде!
Минең шулай булыуым баярға ла ишетелде.
Баяр хәҙер эшләтмәй,
Бәлә-каза эҙләтмәй.



Шундай ярага ҡалған өсөн
Үҙем түләрмен, тип тә әйтмәй.

Йәшем етте ун бишкә,
Котоү коттом сирмешкә.
Кистән котоү котоп ҡайтһаң,
Төндө ебәрәләр тағы эшкә.
Атлапабыҙ ҙа аттарға,
Китәбеҙ ҡырға һаҡларға.
Ҡырҙары ла бик йыраҡ,
Бесәнлек тә — һаҡлауҙа.
Кистән ҡырға китәм,
Иртән өйгә ҡайтам,
Ҡайтҡас сәй ҙә ҡайнатам.
Сәй ҡайнап сыҡҡансы,
Йоҡларға тип ятам.
Әле әбей йоҡопан тормаған,
Уны үҙем уятам.

Йәшем етте ун алтыға,
Управаға барып паспорт алдым да
Киттем Миәс яғына алтынға.
Көндоң хаҡы сорок пять,
Эшләргә косоң етмәһә,
Расчет ал да сығып кәйт!

Йәшем етте ун етегә,
Егет сағым бик елле лә,
Йөрөймөн тик ят илдә.
Барып керҙем бер фатиргә,
Әгәр фатирҙә урыҫ булһа,
Белмәйем ни әйтергә.
Ярай йортта булды бер ҡортҡа.
Исеме уның — Фатима,
Фатима ҡортҡа һорай айлыҡҡа,
Хисабы юҡ байлығының,—
Өс һум ғына бирә айға.
Эшләткән ере урманда—әллә ҡайҙа.
Табып булырмы, юҡмы
Бынан файҙа?
Һөйләшеп-килешеп киттем урманға,
Сыландым бик буранға.
Киҫә башланым утын,
Утын киҫеүе бик ситен.
Был ни төрлө хокөм?
Һалды минең эскә янған утын:
Киҫәмен ағасты йығып,
Ҡуямын ярып өйөп;
Уның аҡсаһы күпме икән, тип

Торамын янып-көйөп.
Өйгә ҡайтып китһәң дә,
Тороп булмай тынып,
Тағы ебәрә ҡортҡа ҡыуып.
Шулай бөттөм был ҡортҡаға
Утын киҫеп эттәй булып.
Туҙып бөтә бар кейем,
Фатима ҡортҡа түләй
Көнөнә бары ун тин.
Нишләйем һуң, бешәм, янам,
Сыҙай алмағас, көскә-көскә
Был ҡортҡанан расчет алам.

Йәшем етте хәҙер ун һигеҙгә,
Кеше менән буйым бик тигеҙ ҙә,
Үҙем ҡыҙыл сырайлы, бик һимеҙ ҙә.
Хәҙер инде эшләмәйем
Яҡын тирәләге байҙа:
Уларҙан табып булмай файҙа,
Киттем хәҙер Уралға — әллә ҡайҙа.
Йәшем етте ун туғыҙға.
Йөрөгән ерҙә мин ҡыҙа башланым
Бер сибәр ҡыҙға.
Ҡыҙҙар ҙа аҡса һорайҙар ҡубыҙға.
Ҡыҙҙар артынан йөрөй торғас,
Тайып йығылдым бит бер боҙға.

Йәшем етте егермегә,
Киттем икенсе бер ергә.
Торамын Себерҙә,
Керештем тимер юлы һеперергә.
Торған ерем Екатеринбурҙа,
Эшләгән ерем ремонтта,
Ярай, эш тә төштө инде ҡулға,
Йөрөтә башланым бит машиналарҙы юлда
Бер уңға, бер һулға.

Йәшем етте егерме бергә,
Ҡайттым Екатеринбурҙан приемға *,
Бирскиҙән түбән Дүртөйлөгә.
Шулай 1908 йылда приемда ҡаралдым.
Күҙ бик таҙа түгел ине,
Бер йыл срок менән ҡалдым.
1909 йылда бөтөнләй ҡотолоп ҡалдым.
Унынсы йылда Кащеев байрындағы
Бер батраҡтың ҡыҙын сығарып алдым.
Ун беренсе йылды Богослов заводына
Урман киҫергә барҙым.
Ун икенсе йылды «Аҡ шишмә» заводына



Эшкә керөп ҡалдым.
Шул заводта дүрт йылдан һуң,
Ун алтынсы йылда,
Ҙур пар торбаһы ярылып,
Эҫе парҙар бәрелеп,
Ике күҙемдән яҙҙым.
Иҫке Уртай ауылына ҡайттым.

Ун алтынсы йылда
Шул заводта һуҡыр булып,
Эшләргә юнь етмәгән сәбәптән,
Күңелдән йыр сығарып файҙа таптым.

Фәррәх башта кем?
Башта ул — етем ҡотоусе,
Ҙурайғас, завод эшсеһе;
Унда оҙаҡ тормай,
Күҙҙәре һуҡырайып ҡайтҡас,
Тағын ауыл кешеһе.
Торған йорто — ауылдың иң түбән осонда,
Соҡор башында,
Һалам менән япҡан башын да.
Өйөндә тик кенә ятмай,
Сығып китә ул торло ергә.
Килеп керә лә ул фатирға,
Керешә үҙенең бәйеттәрен әйтергә.
Төшөм күберәк булһа,
Ул аҙналап ҡуна,
Төшөм булмаһа, шунда уҡ сығып шыуа.
Ул бит шуның менән генә, меҫкен,
Донъяһын ҡыуа.

*1917—1919*

# БӘЙЕТТӘР

## НУРИЯ БӘЙЕТЕ

Һай матур ҡыҙ Нурия,
Бараһы килгән йыйынға,
Алтын йөҙөк ҡулында,
Һабынлап бит йыуына.
Яҡшы кейемдәр кейенә,
Йыйын етә — һөйөнә.

Саниянан йөҙөк алдым,
Кейеп йыйынға барҙым,
Шул йөҙөгөмдө юғалтып,
Хәсрәт-ҡайғыға ҡалдым.
Барып еттем йыйынға,
Керҙем төрлө уйынға;
Йөҙөккәйем юғалғастын,
Асылынам муйылға.
Бөттө минең уйым да;
Йөҙөккәйем юғалғастын,
Ятып илайым юлға.

Төшөп юғалды йөҙөк,
Ҡарап тора бер егет;
Шул йөҙөктө тапһаң, егет,
Һыуҙарҙы сығам йөҙөп.
Табылмаһа был йөҙөк,
Нисек йөрөйөм түҙеп?
Шул йөҙөктө тапһаң, егет,
Бирәм тәңкәмде өҙөп.

Йөҙөккәйем юғалды,
Белмәйем кемдәр алды.
Күп эҙләнем, таба алманым,
Эҙләйһе ер ҡалманы.
Зиһендәрем таралды,
Ике күҙем ҡан алды.
Бар кемәйҙәрем * эҙләште,



Береһе лә таба алманы.
Ҡайттым барған ойомә,
Был меҫкен бик ҡойонә,
Кемәйҙәр табылыр тиһә,
Был меҫкен бик һойонә.
Инде нисек ҡайтайым,
Ҡайтҡас ниҙәр әйтәйем?
Тирғәр инде әсәйем.
Йөҙөккәйем, табылманың,
Белмәйем кемдәр алды.
Йоройһо ерҙәр бик күп ине,
Бер ергә бара алманым.
Уф алла, йөрәгем яна,
Йөҙөгөм юғалып ҡала
Атһуяр ауылында.

Сығып киттем ҡайтырға,
Ҡайтҡас ниҙәр итергә?
Йөҙөк юғалды тигәс,
Моғайын, әсәй тиргәр.
Илай-илай ҡайтып еттем,
Шешенеп бөттө битем.
Әсәкәйем, йөҙөгөмдө
Юғалтып харап иттем.
Әсәһе әйтә Нурияға:
— Ник кеше йөҙөгөн алдың?
Нурия әйтә әсәһенә:
— Кеше йөҙөгөн юғалтып,
Хәсрәт, ҡайғыға ҡалдым.

Сания килде югереп,
Ҡайҙа, ти, минең йөҙөк?
Нурия меҫкен тора түҙеп,
Сания тиргәй ен туҙып.
— Әй, тутәйем, тиргәмә инде,
Йөҙөгеңдө түләрмен;
Түләп тә риза булмаһаң,
Һыуға төшөп үлермен.
Санияға бирәләр
Һыйыр менән самауыр.
Сания һис риза түгел:
— Йөҙөгөмдө табып бир.
— Кил, зинһар, тим, тиргәмә инде,
Мин түгел бит мәлгүн,
Минең ҡайҙа йөрөүҙәрем,
Һәр кемгә лә мәғлүм.
Инде ниҙәр ҡылайым?
Йәнемде ҡайҙа ҡуяйым?
Ошо йөҙөктәре осөн,
Йәнем фиҙа ҡылайым.

Сыктык бакса утарға
Туған, еңгәсәй менән.
Шул Сания йөҙөгө өсөн,
Һыуҙарға төшөп үләм.
Өҫтөмдәге күлдәгемде
Кәштәләргә эләмен,
Шул Сания йөҙөгө өсөн
Ни яфалар күрмәнем.
Яңы күлдәгемде һалып,
Иҫке күлдәгем кейҙем,
Шул Сания йөҙөгө өсөн,
Ҡара күмерҙәй көйҙөм.
Уф алла, ни эшләйем,
Түҙә алмайым йөрәккә.
Еңгәсәйҙәргә барайым,
Бармаҫмы икән еләккә.

Барманым еңгә янына,
Эсем-йөрәгем яна,
Әжәл эҙләп сығып китһәм,
Әсәйем яңғыҙ ҡала.
Әжәл эҙләп сығып киттем,
Шешенеп бөттө битем,
Шул Сания йөҙөгө өсөн
Башымды харап иттем.
Ауылдарҙан сығып киттем,
Үттем баҫыу ҡапҡаһын.
Ҡыскырып берҙе йырлайым
Үкенескә ҡалмаһын.

Нурия ҡыскырып йырлай,
Белмәйем, кемдәр тыңлай.

**Нурия йыры**

Алтын эйәр, мамыҡ мендәр —
Ялан байҙар атына,
Һыуҙарға төшөп үләмен
Алтын йөҙөк хаҡына.
Уф алла, эстәрем яна,
Әсәйем белмәй ҡала.
Шул Сания йөҙөгө өсөн,
Башымды һыуға һалам.

Үткәс баҫыу ҡапҡаһын,
Ташланым алъяпҡысым;
Бер илаймын, бер йырлаймын,
Юҡ күңел йыуатҡысым.
Өҫтөмдәге күлдәгемде



Элеп киттем ҡаҙыҡҡа;
Зифа буйым үҫкән икән,
Балыҡтарға аҙыҡҡа.
Сығып киткән саҡтарымда
Күрә алманым әңкәмде.
Хәйер итеп юлға ташлайым
Сәсемдәге тәңкәмде.
Ошо алтын балдағымды,
Кем алды икән, яуыз!
Әжәл эҙләп сығып киттем,
Әсәйем ҡалды яңғыҙ.
Йәүбәҙе буйы йыраҡ,
Барам юл буйлап илап.
Аҙаҡҡы көнөм бит инде,
Ҡайта алмам мин урап.
Йәүбәҙе һыуы тар икән,
Ике яғы яр икән.
Шул Сания йөҙөгө өсөн
Сығаһы йән бар икән.
Килеп еттем һыу буйына,
Бейек тау, бейек ярға,
Ҡараным һыу ташына.
Тәгәрәп төштөм ярҙы,
Йәлләмәйенсә йәнде;
Бик вафаһыҙ Сания икән,
Алманы биргән малды.
Ултырҙым һыу ситенә,
Йыуған булдым битемде,
Әсәкәйем һыйыр биреп,
Саниәға үтенде.
Уф алла, эстәрем яна,
Шул Сания йөҙөгө өсөн,
Яҡты донъялар ҡала.
Ике күҙем йомайым,
Һыу төбөнә сумайым.
Шул Сания йөҙөгө өсөн,
Йәнем биреп тынайым.

Ике күҙемде йомдом,
Һыуҙың төбөнә сумдым.
Һыу төптәре ҡом икән,
Йән биреү ҡыйын икән.
Байтаҡ ваҡыттар уҙа,
Көнө-төнө ямғыр яуа.
Иҫке Уртай ауылының
Тирмәне йырылып аға.
Нурия бахыр ағып бара,
Белмәйем кемдәр ала.

Һыу ситенән таптылар,
Һыуҙан тартып алдылар,
Уртаҡ ауыл халыҡтары
Хәбәр итә барҙылар.
Ҡаршы сығып алдылар,
Күргәс, урын һалдылар,
Бер үлгән ҡыҙ таптыҡ, тигәс,
Һушһыҙ булып ҡалдылар.
Уф алла, йөрәгем яна,
Әсәһе тәгәрәп илай...

Ҡамытлап ат ектеләр,
Тейәлешеп киттеләр,
Нурияны килеп күргәс,
Һушһыҙ булып бөттөләр...
Ҡарауылсы алдылар,
Милицияға барҙылар.
Доктор-врач килгәстен,
Кәүҙәкәйен ярҙылар.
Милициялар килделәр,
Инде ҡуйығыҙ, тинеләр.
Нурияны, меҫкенкәйҙе,
Зыярат соҡоп күмделәр,
Булған һандыҡ әйберҙәрен
Хәйер итеп бирҙеләр.
Шунда йөргән бәндәләр
Ҙур ғибрәт күрҙеләр.
Уф алла, йөрәгем яна,
Әсәһе әле лә илай:
«Минең Нурия балам,
Алтын йөҙөк юғалтып,
Төшөп үлде Уртайҙың
Тирмән һыуы быуаға
Ун һигеҙенсе йәшендә.
Әжәлдәре еткәстен,
Үлмәне түшәгендә.
Былай булып үлеүе
Юҡ ине иҫәбендә».

***

Был ҡыҙҙың үлеүе шул ваҡытта —
Бер мең туғыҙ йөҙ егерме дүртенсе йылда,
Июлдең ун беренсе көнөндә,
Йәүбәҙе һыуынан табылып,
Уртаҡ ауылы зыяратына күмелә.

*1924*

## ҒӘЛИӘ ҠЫҘ БӘЙЕТЕ

Үттө ҡыштар, килде ҡоштар,
Сүп ташыйҙар ояға.
Оя ҡороп һайрашалар,
Шатланалар донъяға.

Ҡыштар үтте, яҙ булды,
Өйрәк менән ҡаҙ тулды.
Төрлө ҡоштар һайрашҡанды
Тыңлап күңелем булды.

Ҡарҙар бөттө, ер кипте,
Сәсергә ваҡыт етте.
Бөтә колхоз, ударниктәр —
Бары ла сәсеүгә китте.

Ун ете йәшлек ҡыҙ бала
Тракторҙы ҡулға ала.
Эшен яҡшы эшләгәс,
Йыл да бүләген ала.

Кем, тиһәгеҙ, был бала,
Исеме уның Ғәлиә.
Дәүләкәнгә ебәрегеҙ,
Хат яҙһағыҙ һеҙ уға.

Яҙҙан башлап көҙгәсә
Тракторҙан төшмәне.
Кейем йылы, һиҙелмәне
Һалҡын ҡыштың үткәне.

Башҡайында мамыҡ шәл,
Ҡолағында алҡаһы.
Йылы быйма аяҡта,
Һай, килешә пальтоһы!

Ерҙе яҡшы эшләгәс,
Иген уңа баҫыуҙа.
Уңыр ине һәр ерҙә,
Яҡшы эшләһә барыһы ла.

Ғәлиәнең эшенә
Бөтә кеше һоҡлана.
Ғәлиәнең түшендә
«Знак Почета» яна.

Ватан һуғышы заманы,
Ғәлиә һөрә ялаңды.

Фронттағы егеттәргә
Ул күрһәтә ярҙамды.

Бирә иген, бал, майын,
Йәлләп тормай бар малын.
Атаһы ла ике ағаһы
Дошмандың коя канын.

Үлгән уның әсәһе
Кырк ете йәшендә.
Ул онотто кайғыһын,
Күцел биргәс эшенә.

Ебәк яулык, якшы күлдәк
Ғәлиә кыҙ кейгәне.
Күренәлер өс-башынан
Эште ныклап һөйгәне.
Кем әйтер һуң, ул етем,
Кейә сатин, бәрхәтен.
Уңған кыҙ ул Ғәлиә,
Күрә донъя рәхәтен.

Мактайым мин был кыҙҙы,
Иптәштәрен ул уҙҙы.
Мин йырлайым бик мактап,
Һеҙ әйтегеҙ күп такмак.

Мактағанды ярата
Карт йөрәк тә, йәш күцел,
Бындай уңған кыҙҙарға
Бәйет әйтеү йәл түгел.

*1943*

## АЛТЫ ЯЛКАУ БӘЙЕТЕ

Фәррәх бөгөн асыулы:
Карап кайткан баҫыуҙы,
Осраған ялкауҙар,
Улар булған алтауҙар.

Бөгөн шуларға карата
Бәйет әйтеп аңлата.
Береһе — Садик, береһе — Шафик,
Ике Талип, бер Әюп.
Арала бар Сәйет тә,
Барыбер эләгә бәйеткә.



Яҙғы сәсеүҙе сәсергә
Ышанабыҙ йәштәргә.
Йәштәр менән берләшеп
Беҙ уйлайбыҙ йәшәргә.

Алтыһы ла йәш малайҙар,
Һабан һөрөргә ярайҙар.
Ләкин эшкә тип әйтһәң,
Вакытында бармайҙар.

Барып инһәң йортона,
Елкә тырнап ултыра.
Бригадире эш кушһа,
Талашырға тотона.
Икенсе бер барғанда,
Ултыра өҫтәл янында.
Әйтә торғас тыңлайҙар,
Ләкин елкә тырнайҙар.
Был һуң ниндәй малайҙар,
Һәр көн эшкә һуңлайҙар!

Был алтау эшкә китә,
Сәғәт ун бергә етә.
Баҫыуҙарға барып етһә,
Аттар асығып бөтә.

Егәләр ҙә һөрәләр,
Тик һабанды һөйрәйҙәр.
Әле күлем етмәгәп,
Кайтыу яғын һөйләйҙәр.

Кулдарында сыбыркты,
Кыуалар атты һуктырып,
Һөргән ерен караһаң,
Йөрөй камыл йырттырып.

Әремде лә йыкмайҙар,
Атты ғына тукмайҙар.
Аҙырак кына һөрәләр ҙә
Яталар ҙа йоклайҙар.

Аттар тора баш әйеп
Бураҙнаның эсендә.
Малайҙар ятып йоклаған,
Һөрәләр, буғай, төшөндә.

Ер ҙә бөткән боҙолоп,
Кәрт уйнайҙар һуҙылып,
Ә аттары бураҙнала
Тора кояшка кыҙынып.

9 Заказ 144

Баҫыуҙарҙа әрем үҫкән,
Урмандар тип торорһоң.
Ошо әрем араһынан
Нисек иген урырһың.

Ҡушып һукһаң әремде,
Әсе булыр оноғоҙ,
Был бәйетте әйткәнгә,
Асыуланмаһын улығыҙ.

Картуфын да бешерәләр
Өсәр, дүртәр биҙ(е)рә.
Үҙҙәренеке булмаһа,
Орлоҡтоконан әлдерә.

Тағы эшкә торҙолар,
Аҙыраҡ һөргән булдылар.
Ҡарамайынса һәйбәтләп,
Сбруйҙы боҙҙолар.

Сбруйҙы ялғайҙар,
Ҡайткас кеше алдайҙар.
Сбруйҙар насар тип,
Күлемдән һуң бармайҙар.

Былдай малайҙар күп түгел,
Улар беҙҙә бик һирәк.
Былдай ялҡау малайҙарҙы
Ҡыҙҙырырға бик кәрәк!

*1944*

## ВАТАН ҺУҒЫШЫ БӘЙЕТТӘРЕ

### Беренсе бәйет

«Дуҫ йәшәргә» булдылар ҙа
Беҙгә һуғыш ҡорҙолар.
Тыныс торған ил халкын
Өйҙәренән ҡыуҙылар.

Ҡара болоттай булып
Килделәр, күк-ер тулып,
Был ҡараҡтар күп илде
Яндырҙы һәм емерҙе.



Килеп баҫтылар ҡапыл
Тәмле йоҡола ваҡыт.
Тыныс торған ҡалаларҙы
Фашистәр үтте ватып.

Һауаларҙан ут яуа,
Ауылдар дөрләп яна.
Әсәһенән айырылып
Тороп ҡалды күп бала.

Ләкин улар килә тип,
Беҙ төшмәнек ҡалтырап.
Ҡаршы торҙоҡ дошманға,
Ҡалманыҡ беҙ аптырап.

Беҙгә һуғыш асыусы,
Һиҙендермәй баҫыусы,
Баҫып инһә лә илгә,
Ут һипһә лә күп ергә;

Күтәрелде бар халыҡ:
Ата, улы, ағаһы,
Саҡырғанға Сталин —
Юлбашсыбыҙ, оҫта ир.

*1941*

### Икенсе бәйет

Мин әйтәйем, һеҙ тыңлағыҙ,
Ул көндөң бәйеттәрен.
Гитлер яуыз, ымһыныш,
Бер һөсләне эттәрен...

Йәйҙең йәмле айында,
Таң ҡыйылған сағында,
Ялҡын уттар күтәрелде
Көн байышы яғында.

Йәкшәмбе көн сәғәт дүрттә
Иртән тороп таң менән,
Һуғыш асып, Гитлер дошман
Битен йыуҙы ҡан менән.

Барлыҡ көсөн бергә туплап,
Һауа юлдары менән
Беҙҙең илгә һуҙылды
Ҡанлы ҡулдары менән.

Тыныс торған илебеҙгә
Баҫып инеп, германдар
Бер ай ярым эсендә
Еңмәксе лә булғандар.

Совет илен еңә алмаҫ,
Булдыра алмаҫ, ҡыралмаҫ.
Көнө килер, Гитлер дошман
Ояһында торалмаҫ!

### Өсөнсө бәйет

Беҙ әйтәбеҙ, һеҙ тыңлағыҙ
Ҙур һуғыштың йылдарын,
Бындай һуғыш ер йөҙөндә
Һис бер ҡасан булмаһын.

Ауыр туптар атҡан саҡта,
Дер һелкенә ҡалалар.
Был һуғышты күрҙе инде
Ата, әсә, балалар.

Беҙ еңербеҙ Германды,
Еңеү беҙҙә буласаҡ,
Ҡыҙыл Ғәскәр көсөнән
Дошман көлгә ҡаласаҡ.

Дошман бөтөр донъяла,
Тыныс тормош төҙөлөр.
Бер көн килер, Гитлерҙең
Башы тамам өҙөлөр.

Улар ҡалмаҫ донъяла,
Нindәй хәйлә ҡорһа ла.
Беҙ фашистән ҡурҡмайбыҙ,
Ажарланып торһа ла.

### Дүртенсе бәйет

Башта ҡотороп килделәр,
Уйламайса аҙағын.
Бер ваҡытты гитлерселәр
Күрер әле ғазабын.

Кешегә баҙ ҡаҙыһаң,
Үҙең һыйырлыҡ булһын.
Үҙе ҡаҙыҡан баҙҙа
Гитлер дөмөгөп үлһен!



Беҙҙән теләк шул булһын:
Йөҙ түбәнгә йығылһын!
Йығылһын да, мороно
Ҡара ҡанға йыуылһын!

Ҡабат ҡулын һуҙмаһын,
Ил сигенән уҙмаһын.
Сәскә атҡан илебеҙҙең
Тыныслығын боҙмаһын.

Ҡыҙыл Ғәскәр илгә ҡайтыр
Дошмандарҙы бөтөрөп.
Үҙ өңөндә боҫоп ятҡан
Гитлерҙе дөмөктөрөп...

### Алтынсы бәйет

Ил халҡы берҙәм булып
Ярҙам иткәс ғәскәргә.
Ҡыҙыл Ғәскәр немецтәрҙе
Олаҡтырҙы Мәскәүҙән.

Гитлерҙең «йәшен» һуғышы
Бик оҙаҡҡа тартылды.
Ҡорған планы — уңышһыҙ,
Быялалай ватылды.

Башта Гитлер етмәк булды
«Ай ярымдан Уралға».
Ҡыҙыл Ғәскәр ныҡ сумдырҙы
Уны утлы буранға.

Арт һабағын уҡыттыҡ
Сталинград янында.
Сайкап алып ырғыттыҡ
Текә Волга ярынан.

Киев тигән ҙур ҡаланы
Азат итеп алдылар.
Фашистәрҙе Днепрҙа
Күпер итеп һалдылар.

Һалдаттары ҡырылды,
Гитлер артҡа боролдо.
Ҡул һуҙғанда бәлешкә,
Өлөш алды ҙур шештән!

Илебеҙҙе һаҡлаусы
Партиябыҙ бар беҙҙең.
Ҡыҙыл Ғәскәр нык торғас,
Беҙҙең илгә кем тейһен?!

# ЙЫРҘАР, ТАҠМАҠТАР

## БЕҘҘЕҢ ҠОЯШ

Беҙҙең тормош гөлсәсәк,
Тағы ла якты буласаҡ.
Беҙҙән тыуған балалар
Тағы ла яҡшы торасаҡ.

Беҙҙең тормош яҡтыра,
Бөтә донъя яҡтыра.
Партияның әйткән һүҙе
Бөтәһе лә фактыла.

Партияның һәр бер һүҙе
Тора беҙгә бер ҡояш.
Төнөбөҙ ҙә көндәр кеүек,
Шул ҡояш балҡып торғас.

*1939*

## ИШЕМБАЙ

Балҡып тора Ишембай,
Ишембай нефткә бай.
Нефть булһа, илем бай,
Уға дошман килә алмай.

Был байлыҡтар күптәнге,
Меңәр йылдар ятҡандар.
Бөгөн килеп ул байлыҡты
Большевиктәр асҡандар.

Юл һалғандар, ер ҡаҙып,
Өфөгә тиклем һуҙып,
Шул ер аҫты юлдарынан
Нефть аға урғылып.



Оҙонлоғо йөҙ илле,
Һалған юлдары елле.
Ошо юлдан аҡҡан нефть
Байыта беҙҙең илде.

Тырышып эшләң, нефтселәр,
Илдә нефть күп булһын!
Илебеҙҙе байыҡтырһын,
Шишмә урғылып торһон.

Алтын беҙҙең илебеҙ,
Көмөш беҙҙең илебеҙ,
Көндән-көнгә, йылдан-йылға
Алға бара илебеҙ.

*1939*

## АТЛАНАЙЫҠ АТТАРҒА

Атланайыҡ аттарға,
Сер бирмәйек яттарға.
Колхозсылар ярҙам итә
Тыуған илде һаҡларға.

Тыуған илебеҙ алтындай,
Батырҙары ялҡындай.
Ҡаршы килгән дошмандар
Ҡан эсендә ятырҙар.

Беҙ — батыр, ныҡ беләкле,
Киң күкрәк, ҡуш йөрәкле.
Гитлер тигән ахмаҡҡа,
Бирербеҙ һуң кәрәкте.

## ӘЙҘӘ, НЫҒЫРАҠ ҺУҒА БИР!

Беҙҙең ғәскәр бик батыр,
Дошманға тура атыр;
Ҡыҙыл Ғәскәр туптарынан
Дошман ҡырылып ятыр.

Ҡайһылары имгәнер,
Аҡ марлягә биләнер.
Бөтһөн дошман донъяла,
Әйҙә, ныҒыраҡ һуға бир!

Хәҙер беҙҙең ҡыҙҙы ҡан,
Китте инде беҙҙең дан.

Оҙаҡламай беҙ күрербеҙ
Еңеү көнө — ҡыҙыл таң.

Ҡыҙыл Ғәскәр урап алғас,
Дошман юлы ҡыҫылды.
Күрмәгәнен күрһен инде,
Үҙ башына осондо!

*1943*

## ҠОШТАР ҺАЙРАЙ

Ҡыш булдиһә ер шаулай,
Йәй булдиһә ҡош һайрай.
Килгән ҡоштар оя өсөн
Матур ағасты һайлай.

Аҫыл ҡоштар оя яһай
Аҫыл ағас башына.
Балаһына аҙыҡ ташый,
Ҡайҙан таба ашын да.

Бишәр бала сығарып
Еткерә лә осора.
Балалары осоп ҡуна
Шул ағастың осона.

Кемдәр ярҙам итә икән
Донъялағы ҡоштарға.
Көҙ булдиһә осоп китә
Йылы яҡҡа ҡыштарға.

Яҙ булдиһә килеп етә
Үҙе тыуған иленә.
Килеп етә, ғүмер итә
Тыуып-үҫкән өйөндә.

Ояһын ҡылдан сырмаған,
Былтыр шунда йырлаған.
Ҡоштар йырлаған тауышҡа
Ҡарт-королар илаған.

Ҡош тауышы матур була
Йәйҙең йәмле сағында.
Йырларһың да, иларһың да
Тыңлап торған сағында.

Ҡоштар һайрай урманда.
(Йәмле тыңлап торғанда.)



Күтәрелә күңелдәрем,
Илебеҙ тыныс торғанда.

Ҡоштар ҙа рәхәт йәшәйҙәр,
Иле тыныс сағында.
Ҡош та тыныс йәшәй алмай
Һуғышҡан ил яғында.

Ҡоштар һайрай, Гитлер илай,
Ниңә илай ул былай?
Ерен тырнай, үкереп тулай,
Үлем һулышын һулай.

Күҙен ҡоҙғон соҡоһон,
Һөйәге эттәргә булһын.
Күренмәһен, күмелмәһен,
Яткан көйө таш булһын!

*1943*

## ЯҘ ЕТТЕ

Үтте ҡыштар, етте яҙҙар,
Килерҙәр торна, ҡаҙҙар,
Ҡыр ҡаҙындай теҙелешеп,
Сәсеү башлар колхоздар.

Яҙғы сәсеү планы,
Эшләмәйсә, туламы?
Тултырмаһаң норманы,
Уңыш алып буламы?

Килеп етер комбайн,
Урып бирер бойҙайын.
Эштәр иртә башланып,
Иртә бөтһә уңайлы.

Эштәр бөтһә иртәрәк,
Иген булыр бурала.
Эшкә күңел һалмағанды
Йөрөтмәйек арала.

*1946*

## ҮРСЕТӘЙЕК МАЛДЫ, БИРМӘЙЕК АЛДЫ

Бар колхозда фермалар,
Һикһән һыйыр һауалар.

Һөт нормаһын хөкүмәткә
Гел арттырып һалалар.

Закупка ла бирәләр,
Трудка ла бүләләр.
Малды яҡшы ҡарағас,
Мул торорға беләләр.

Эре һыйыр нәҫеле,
Торор ерҙәре йылы.
Ҡараусылар бик яҡшы,
Мал аҫты булмай шаҡшы.

Һыйырҙары бик һөтлө,
Ҡабырғалары итле.
Колхоздағы кешеләр
Тора беләләр иплe.

Һәндерәләр бесәнле,
Эҫкерттәрҙә һаламы.
Аҙбар тулы һарығы,
Арала юҡ арығы;
Бары ла һимеҙ,
Бары ла тигеҙ,
Бары ла юнле,
Бары ла йөнлө.

Яҡшы колхоз малдары
Тишек ергә ябылмаҫ.
Шуның өсөн уларға
Бур, бүреләр ҡағылмаҫ.

Малсылыҡтың планын
Яҡшы итеп үтәйҙәр.
Һәр йыл һайын бүләкләнә
Мал ҡараусы түтәйҙәр.

Тауыҡтары эреләр,
Йомортҡаны күп һала.
Мин түгел бит счетовод,
Үҙең кереп бел, һана.

Тауыҡтарҙың йомортҡаһын
Йыя һәр көн әбейҙәр.
Һис хыянат итмәйҙәр:
Үҙҙәре хужа улар.

Тауыҡтарҙы үлтермәй,
Юҡҡа аҙыҡ бөтөрмәй.



Колхозға ла, дәүләткә лә
Һис бер зыян килтермәй.

Әбейҙәрҙең исеме —
Сәхипъямал, Көнбикә.
Быңдай яҡшы әбейҙәр
Беҙҙең илдә күп икән.

Йәштәре еткән етмешкә,
Дәртле йөройҙәр эшкә.
Гел генә улар фермала:
Иртә менән дә, кис тә.

Был колхоздың аттары —
Бар ҡолаһы, саптары.
Күргәнем юҡ ҡорсаңғы
Аттар еккән саҡтарын.

Фәррәх ул шундай кеше,
Маҡтай ул яҡшы эште.
Яманламаһын тиһәгеҙ,
Һис йәлләмәгеҙ көстө.

*1949*

### ТЫУҒАН ИЛ

Беҙҙең тыуған илебеҙ,
Яҡты торған еребеҙ,
Боҙолмаҫлыҡ, туҙылмаҫлыҡ
Беҙҙең һалған ойөбөҙ.

Минең халыҡ — көслө халыҡ,
Коммунизм төҙөй ул.
Еңеүҙәргә алып бара
Беҙ атлаған тигеҙ юл.

Хас дошмандар һуғыш менән
Килһә беҙгә тағы ла,
Өмөт тотҡан атомдары
Төшөр үҙ баштарына.

Ҡара болот ҡаплай алмаҫ
Илемдең яҡты күген,
Белһен дошман, Совет илен
Еңергә мөмкин түгел!

*1949*

## УРАЛ

Мин бәләкәй сағымда
Йөрөнөм Урал яғында,
Яңғыҙ башым, түгелә йәшем —
Юҡ дуҫтарым янымда.

Эшләнем мин Уралда,
Утын киҫтем урманда.
Ас-яланғас күп тилмерҙем
Ел-дауылда, буранда.

Өҫкә кейҙем алама,
Аяғыма — сабата.
Торған һайын ҡомһоҙ хужам
Асыуымды ҡабарта.

Асығып ҡайтып ауам
Ишек төбө һикегә,
Кис менән үк хужа килеп:
«Күп ятма!» — тип екерә.

Таңдан тороп урманға
Тағы кәрәк барырға;
Ауыр булды, ай Уралым,
Һиндә тын да алырға.

Сирләгән булып бер саҡ
Ҡайттым, дер-дер ҡалтырап,
Больницаға барам тиеп,
Ҡастым бынан аптырап.

Моңһоу йырҙар һуҙҙым мин
Уралым тауҙарында...
Әкиәт кеүек шул заман
Килә күҙ алдарыма.

Ҙур таң килде донъяға,
Тыуҙы яңы быуындар.
Мин, Фәррәх, шат йыр йырлайым
Киң Уралым ҡуйынында.

*1949*

## БАҪЫУ УРМАНЫ

Ятып тына белмәйем
Йәйен, ҡышын, яҙын да.
Бер саҡ сығып киттем юлға
Күрше колхоз яғына.



Янымда юҡ юлдашым,
Күҙҙәр күрә самалы:
Ҡошка йәки кәбәнгә
Оҡшатам һәр бер ҡараны.

Бына бер саҡ күҙемә
Оло шәүлә күренә...
Әллә яңылыш киттемме тип,
Ҡурҡыу төштө күңелгә.

Әллә болот, әллә тау,
Әллә урман, әллә яр?..
Былтыр ғына был юлдан
Минең уҙған сағым бар.

Урман тиһәм, был ерҙә
Бер ағас та юҡ ине,
Юлы ла соҡор-саҡыр
Насар ғына юл ине.

Ә юл хәҙер тип-тигеҙ:
Таш йәйеп, ҡом түшәлгән.
Ҡайһы ғына арала
Бындай ҙур эш эшләнгән!

Белдем, теге шәүлә — ул
Ултыртҡан урман икән,
Минең барған юл арҡыры
Тауға үрелеп киткән.

Ағастар шаулай елдә,
Баҫыуҙар мул игенле.
Шаулап торған урман аша
Уҙыуы ла күңелле!

*1951*

## БАШВАТКЫСТАР

1. Шулай бер вакытта
Өс кеше сығып киттек юлға.
Өсөбөҙҙөң дә өҫтөбөҙҙә
Күлдәктәребеҙ киндер.
Бара торғас, таптык
Юлдан бер бау керәндил.
Был керәндилдең береһен дә ватманык,
Ашаманык, һатманык.
Капсыкка ғына һалып куйҙык,
Үҙебеҙҙең вакытыбыҙ еткәнсе һаклаfamanык.

Осраныk бара торғас бер байға,
Бай беҙҙе ялланы
Урак урырға боҙайға,
Эштәр китте инде беҙҙең уңайға.
Бер иптәшебеҙ ура теге башта,
Икенсебеҙ ура ерҙең был башында,—
Бай бешереп килтерә алмай әле ашын да.
Өсөнсөбөҙ беҙҙең ура әйберҙәр янында.

Бер вакыт корһак аскан сағында,
Капсыктағы керәндил иҫкә төштө.
Иптәштәр арырак барып урырға кереште.
Мин уларға әйтмәйенсә
Әйберҙәрҙең янына барам,
Керәндилде капсыктан тартып алам.
Керәндилде өскә бүләм,
Был керәндил өсөбөҙгә лә тигеҙ тейә:
Һәм уға, һәм һиңә, һәм миңә.
Мин үҙемә тигәнде ашаным
Һуңынан тағы ура башланым.
Тегеләр минең ашағанды белмәне:
Арала кыуак булғас,
Улар мине күрмәне.



Бер аҙҙан һуң икенсебеҙ килеп,
Керәндилдәрҙе йәнә өскә бүлгән,
Һаман да шул өс кешегә тигеҙ тейгән.
Бер керәндил дә ватылмаған,
Беҙҙе килегеҙ тип сакырмаған,—
Үҙенә тейгән өлөштө ашаған,
Тағын ура башлаған.

Унан өсөнсөбөҙ килә,
Керәндилде тағы өскә бүлә,
Һаман да тигеҙ тейә.
Керәндилдең күпме икәнең кем белә?

Бер аҙҙан өсәү бергә барабыҙ,
Тағын бүлеп алабыҙ,
Тағын тейҙе тигеҙ.
Был керәндилдәрҙе беҙ белмәйбеҙ,
Әллә туғыҙ, әллә һигеҙ?
Бауҙа күпме керәндил булғанын,
Бәлки, һеҙ белерһегеҙ?

2. Бер вакыт шул ук өс кеше
Кайтып киләбеҙ өйгә,
Кайтмай ҙа тура килмәй,
Күп йөрөнөк инде илдә.
Килеп еттек бер ауылға,
Акса бар беҙҙең әйбер һатып алырға.
Инде хәҙер нишләргә?
Керҙек бер мәрйәгә
Сәй эсергә.
Сәйҙе эсеп туйҙык,
Мәрйәгә сәй эскән өсөн
Аксаны иҫәпләп куйҙык.
Мәрйә аксаны алмай:
— Былай ғына,— ти,— миңә бармай.—
Килтереп куя ла беҙҙең алға бер һандык,
Әйтә мәрйә: «Ошо һандыкта,— ти,—
Күпме, әҙме аксам бар.
Әүәле шул аксаны
Берегеҙ һанап алығыҙ,
Шуның кәҙәр кеҫәгеҙҙән
Акса алып һалығыҙ;
Һалғандан һуң,
Егерме тин кайтарып алығыҙ».

Мәрйәнең аксаһын алам,
Шуның кәҙәре һанап һалам,
Шунан егерме тин кайтарып алам.

Икенсебеҙ һандыкта ҡалған
Аҡсаны һанап ала,
Йәнә шуның ҡәҙәре
Кеҫәһенән сығарып һала.
Шул аҡсанан егерме тинде
Ул да ҡайтарып ала.
Өсөнсөбеҙ ҡалған аҡсаны алды,
Кеҫәһенән шул аҡса ҡәҙәре
Ул да иҫәплэп һалды,
Унан егерме тинде ҡайтарып алды.
Шулай итеп, ала торғас,
Һандыҡтағы аҡса
Беҙҙең кеҫәгә кереп бөттө,
Мәрйәнең иҫе китте.
Үҙенең договоры шулай булғас,
Риза ла булды инде.
Ошо мәрйәнең һандығында
Күпме аҡса булды икән?

3. Әсәйеңдең һеңлеһенең еҙнәһе һиңә кем була?

4. Бер ваҡыт ҡайтып барышлай Өфөнән
Керҙем фатиргә бер йортҡа,
Бала һөйөп ултыра бер ҡортҡа.
Ҡортҡанан һораным:
— Әллә, әбей, йәш балаң бармы? — тип.
Ҡортҡа яуап бирҙе:
— Был бала үҙемдеке түгел —
Баламдың балаһы,
Иремдең бер туған әнеһе,— тип.
Кемдән тыуған бала икән был?

5. Баҡсалағы ағастарға күн дә кис ҡоштар килеп ҡунаҡлай. Килгән ҡоштар һаны артмай ҙа, кәмемәй ҙә. Ағас һайын берәмләп ҡунһалар, бер ҡош артып ҡала; икешәрләп ҡунһалар, бер ағас буш ҡала. Бында нисә ағас бар, уларға нисә ҡош ҡуна икән?

6. Һигеҙ ҡаҙаҡ һыйышлы силәккә кәбәк тултырылған. Эргәһенә бер биш ҡаҙаҡлы, бер өс ҡаҙаҡлы ике буш силәк ҡуйылған. Шул силәктәр менән кәбәкте ике быҙауға тигеҙ итеп бүлеп бирергә кәрәк.

## ЙОМАҠТАР

Йомаҡ әйтәм, табығыҙ,
Һүҙемә ҡолаҡ һалығыҙ.
Әгәр берәү тапҡан булһа,
Яуабын яҙып һалығыҙ.

1. Ер шарына бәйләнгән,
Бөтә илде әйләнгән.
Буйы оҙон — ҡолас етмәй,
Күләткәһе күренмәй.

Үҙе йөрөй — йәне юҡ,
Киҫеп ҡара — ҡаны юҡ.
Өтөргө һис тишалмай,
Бысҡы, балта киҫалмай,
Бырау тишә — тишек ҡалмай.

Һөйәге юҡ, ите юҡ,
Үбеп ҡарар бите юҡ;
Төҫкә матур — көмөштәй,
Ул булмаһа, кем эшләй?
Унһыҙ кеше торалмай,
Булдыралмай, ҡоралмай...

Бөтә илгә ярҙам итә,
Ҙур заводты эшләтә.
Яңғыҙ йөрөп аҙашканды
Ул үҙе үк эҙләтә.
Ҡырҙа ҡунһаң, ни кәрәк?
Уға йылы өй кәрәк.
Өшөп туңған кешегә
Төрлө дарыу, көй кәрәк.

Ҡояшта йөрөп янып ҡалһаң,
Тамағың кипһә, нишләйһең?

Һушың етеп, йөрөй алһаң,
Һаҙҙан һыуҙы эҙләйһең?

Был йомағым шул **икән,**
Кибеккәнгә һыу **икән!**

2. Кәртәһе юҡ ҙур баҡса,
Ун икелер түтәле.
Был баҡсаның емештәрен
Ашап ҡара, бик тәмле.
Түтәл һайын бураҙна,
Һанап ҡара — утыҙар.
Был баҡсаның эсе иркен,
Һәр кем керһә лә уҙар.
Һәр бураҙна өҫтөндә
Утыҙар төп алмағас.
Был табышмаҡ бар ҙа дөрөҫ,
Ышанырһың аңлағас.
Һәр бер алма ағасы
Егерме дүртәр алмалы.
Был баҡсаның алмаһын
Берәү күрмәй ҡалманы.
Һәр бер алма эсендә
Алтмышарҙыр таштары.
Был алмаға үҫергә
Зыян итмәй ҡоштары.
Алма түгел тотоп ашарға,
Кәрәк быны уйлап ҡарарға.
Үҙенән-үҙе килеп тора,
Һатып булмай уны баҙарҙа.

3. Аяҡһыҙ, ҡулһыҙ,
Килә юлһыҙ.
Күҙгә күренмәй,
Килгәне лә беленмәй,
Бер кем дә ҡыуаламай,
Берәү ҙә тотоп алалмай,
Алға китә —
Артҡа бара алмай.

4. Көндөҙ күренмәй,
Төннә беленә,
Яҡын күренә;
Ултыртып ҡуймаған,
Сөйгә лә элмәгән;
Уны бер әҙәм дә
Тотоп белмәгән.

5. Оса тиһәң, ҡанатһыҙ,
Йөрөй тиһәң, аяҡһыҙ.



Ергә теймәй,
Күккә лә бәрелмәй,
Күҙгә күренә,
Бары-юғы ла беленә.

6. Ҡыш — ҡунаҡта,
Йәй — йыраҡта;
Төн тиһәң, йылыһы юҡ,
Он тиһәң, короһо юҡ;
Яланда йырлай,
Йәйгә керһә илай.

7. Иртән килә,
Кис китә;
Һөйләшеп тормай,
Көлөп үтә.

8. Бара белә, ҡайта белмәй:
Тултырып ал, кәмегәне беленмәй.
Югереп бара юл менән,
Һине тотмай ҡул менән.
Ҡулың менән тоторһоң,
Тәмле булһа, йоторһоң.
Һин таҙа, ул паклы,
Ул һине пакландыра,—
Һорамай хаҡты.
Үҙе юлдан бара,
Ятаһа, саҡырып та ала.
Аркан менән бәйләп ҡуя алмайһың.
Кәрәк булһа, һин унан туялмайһың,
Донъяла унан башҡа торалмайһың.
Саҡырып килмәй, барып алаһың.
Уның менән күрешкәндә,
Күңел асып ҡалаһың.
Ул донъяла ҡеүәтле,
Татлы аштан ҡиммәтле.
Ул ауырҙы күтәрә,
Күп малдарҙы үткәрә,
Алып бара, килтереп ҡуя,
Бик ҙур файҙа килтерә,
Йә нимә был, кем белә?

9. Килмәһә, һағындыра,
Йышыраҡ килһә, көйөндөрә.
Ул һине килеү менән кейендерә,
Ваҡытында килһә, һөйөндөрә.
Килмәй торһа, тиргәйҙәр,
Йышыраҡ килһә, сирләйҙәр.
Ваҡытлы килһә, халыҡ ярата,

Йышыраҡ килһә, һалҡын тарата,
Яҡындан килһә, йыраҡ үтә.
Беҙгә лә килегеҙ, тип
Халыҡ көтә.
Ул барында ла ҡунаҡ булмай.
Ваҡыты юҡ, һөйләшеп тормай.
Ваҡыты булһа, ҡуна килә.
Ҡуна килһә, ҙур файҙалар бирә.
Ул илгә файҙалы,
Үҙе әллә ҡайҙағы,
Килһә, барына ла етешә,
Ул наҙланып тормай,
Барына ла тигеҙ төшә.

10. Югереп килә —
Тотоп булмай;
Шундай тәмле —
Йотоп булмай.
Килгәнен тояһың —
Төҫөн күрмәйһең:
Аяҡһыҙ, ҡанатһыҙ,
Башһыҙ, кәүҙәһеҙ.
Бер кем дә барып етә алмай,
Үҙе килеп бөтә алмай;
Югереп сыға,
Бәреп йыға,
Ҡеүәтең булһа, үҙең сыҙа.
Аҙбар башын емергән,
Был ни төрлө эш булған!
Бер яҡтан — дуҫ,
Икенсе яҡтан — дошман.
Тота белһәң, дуҫ була,
Тоталмаһаң, буш була.
Дуҫ булһа, ул һөйөндөрә,
Дошман булһа, көйөндөрә.
Кескенәнән ҙур була.
Көс алды иһә, мул була.
Билдән тотоп көрәшмәй,
Һинең менән һөйләшмәй.
Был эштән булығыҙ һаҡ,
Хәтерең булһа, эҙләп тап.

11. Бар ҙа түгел, юҡ та түгел,
Артыҡ көйһөҙ — күпкә түгел.
Аяғы юҡ — югереп килә,
Ерҙән дә түгел, күктән дә түгел.

12. Күҙ булһа, сисенә,
Яҙ булһа, кейенә;



Әкрен иҫкән йылы елгә
Ул шатлана, һөйөнә.

13. Осоп килә, йөҙөп китә,
Ваҡыты еткәс, тиҙ бөтә.

14. Ап-аҡ күлдәген кейгән,
Беҙгә ҡунаҡҡа килгән.
Көндәр йәмле, ҡояш балҡый —
Бер илаған, бер көлгән.

15. Күптән түгел күмелгән,
Ни арала күренгән.

16. Былтыр илтеп ҡуйғандар,
Быйыл барып йыйғандар.

17. Аҡ юрғандың аҫтында
Ҡыш буйына йоҡлаған.
Юрған туҙып бөтмәйсә,
Баш ҡалҡытып сыҡмаған.
Йәйгә сыҡҡас йоҡламай,
Көнө-төнө эшендә.
Уның эшләгән эшенән
Файҙа күрә кеше лә.

18. Билен ҡыҫып быуғандар,
Барын да өйөп ҡуйғандар.

19. Ҡырып урын ҡорғандар,
Түтәйҙең башын ҡырғандар.

20. Ҡанаты бар — оса алмай,
Әйләнһә лә, ҡуҙғала алмай.

21. Һаҡлан йәнһеҙ дошмандан.
Ерҙә үҫә — япраҡ ярмай: тамырһыҙ.
Әгәр һеҙгә кәрәк булһа,
Үҙегеҙ барып алырһыҙ.

22. Тултыралар, төйәләр,
Сығаралар, өйәләр;
Көндә кипкән етмәгән,
Ут эсендә кибәләр.

23. Атаһы — күп,
Әсәһе — берәү.
Ул донъяла бар,
Үҙеңдә булмаһа,
Һатып ал.

Ул беҙгә кәрәкле,
Бирә ул беҙгә бүләкте.
Атаһы ҡысҡыра,
Теләһә ҡайҙа ысҡына,
Ҡыуып бара,
Ҡыйнап китә.
Атаһы маҡтана,
Әсәһе шатлана.

24. Аяғы бар, ҡулы юҡ,
Йөрөһә, юнле юлы юҡ.
Ятҡан ере бик һыуыҡ:
Урынында йылы юҡ.
Һауып булмай: һөтө юҡ,
Һуйһаң, әллә күпме ите юҡ.
Ни ҡәҙәрле ашатһаң да,
Ауыҙы бар, бите юҡ.

25. Бәләкәй генә бер мискә,
Көн дә эшләнә кискә.
Ул мискәне эшләгәндә,
Ҡаҙаҡ ҡаҡмайҙар һис тә.

26. Дүрт тотҡалы бер ҡапсыҡ,
Тартҡылайҙыр бер ҡарсыҡ.
Ул кешегә бик ҡәҙерле:
Биргәне — бик таңһыҡ.

27. Иле бар — ере юҡ,
Ите бар — елеге юҡ.

28. Мал да түгел — аҫырайҙар,
Малдан артыҡ ҡарайҙар.
Тәрбиәләп аҫырағас,
Ул күп файҙаға ярай.
Кешенән аҡыллы,
Ҡыйбат малдан хаҡлы:
Әгәр алам тиһәң,
Һорайҙар уға атты.

29. Йәйен-ҡышын урамда,
Йөрөй асы буранда.
Ул һөйөнә, маҡтана,
Тамағы туҡ булғанда.

30. Тунын кейгән өҫтөнә,
Тәрбиә юҡ меҫкенгә:
Бирһәң — ала, бирмәһәң — юҡ,
Сыҙай ала өс көнгә.
Һаҡалы бар — мыйыҡһыҙ,
Ҡата кейгән ойоҡһоҙ.



Һапһыҙ һәнәк күтәреп,
Эшкә бара — трудһыҙ.

31. Һаҡалы юҡ — мыйыҡлы,
Кеймәй сабата, ойоҡто;
Төннә ҡарауылда тора,
Яҡшы төшөрә «трудты».

32. Ҡыш буйына зинданда,
Йәйгә сыҡһа — сәхрәлә.
Эште бергә эшләйҙәр,
Уларҙың эше зәһәр ҙә!

33. Ҡыш булһа, йыраҡта, йәйен килә ҡунаҡҡа,
Бигерәк тә әрһеҙ ҡунаҡ, йәбешәләр ҡолаҡҡа.
Асыу килгәс һуғаһың, һуҡмай нисек сыҙайһың!
Үҙҙәренең хәлдәре юҡ, бер һуктиһәң, йығаһың!
Йырлай тиһәм, көйө юҡ, үҙенең ҡайтыр өйө юҡ,
Ҡысҡыра ла екерә, үҙенең юнле эше юҡ.

34. Үҙе аяҡһыҙ, үҙе ҡулһыҙ—
Һыуҙы йөҙөп сығала;
Менә тауға, баҫа талға,
Шунда бала сығара.
Йәй буйына урманда —
Ҡышҡа керһәң, юҡ унда;
Эҙләһәң дә, табалмаҫһың:
Ҡыш булдиһә, юғала.

35. Ҡанаты бар — осалмай,
Аяғы юҡ — йөҙә ала.

36. Өтөрөһөҙ, бырауһыҙ,
Тишеп бура яһаған.
Бура яһаған өсөн,
Күп бойҙайҙы ашаған.

37. Ауыҙы юҡ, теле бар,
Һүҙе матур, алып ҡал!
Уны ҡайҙа тиһәгеҙ,
Магазин тулы, барып ал.

38. Аяғы бар — атламай,
Ҡулы ла бар — тота алмай;
Үҙе кескенә булһа ла,
Уттан, һыуҙан ҡур(ы)ҡмай.

39. Аяғы — өсәү, ҡанаты — дүртәү,
Ултырған ерҙән осалмай.
Уны осоп китер тиһәң,
Бер кеше лә ышанмай.

40. Аяғы бар, йөрөмәй,
Ҡыйнаһаң да, югермәй.
Уның да үҙ эше бар,
Уға килгән кеше бар.

41. Гел урында ултыра,
Теләһә ни тултыра.
Уға яҡын барған кеше
Элек шуға тотона.

42. Ағас түгел — япраҡлы,
Һәр кемгә ул яраҡлы.
Кейем түгел — тегелгән.
Быного нимә икәнен
Уҡымаған да белгән.

43. Эшләгәндәр ағастан,
Үҙәген — ҡара таштан.
Уның менән йәшәп була,
Тота белгәндә йәштән.

44. Үҙе атланып ултырған,
Ҡолағына тотонған.
Артынан ат еталмай,
Әйтерһең, тилереп ҡоторған.
Өҫтөнә менеп атланған,
Мөгөҙөнә тотонған.
Етеп булмай артынан,
Ыҫкынды бит Тимерхан!

45. Ике ҡулы ла өҙөк,
Йөрөй Иҙелдә йөҙөп.
Һыуҙар һалҡын булғанда,
Нисек йөрөйҙөр түҙеп.

46. Ҡоро ерҙә сабыулай,
Бысраҡ булһа, һалыулай.
Ай һай, үҙе шәп югерә —
Табаны нисек ярылмай!

47. Ҡойроғон батыра, үҙе бик нык ақыра.
Ҡыштар үтеп, яҙ булдиһә,
Сәхрә-ырҙар саҡыра.



48. Арба тиһәң, тәртәһеҙ,
Йылҡы тиһәң, аяҡһыҙ.
Теләһә ҡайҙа барып ҡайта,
Йөрөгән юлы маяҡһыҙ.
Күпере юҡ һыуында,
Таш йәймәгән юлына.
Эстә ултыра күсере,
Сыбыртҡы тотмай ҡулына.

49. Үҙе алдан югерә, теләһә кемгә керә.
Кеше йәне нимә теләй, ул ала ла, ул бирә.
Ҡулың да юҡ тоторға, аяғы юҡ атларға.
Сығам тиеп ҡысҡыра, булмай инде һаҡларға.
Ҡанаты юҡ осорға, осҡан кеүек ысҡына.
Сабырһыҙ кешегә килеп керһә, сығам тиеп
ҡысҡыра.

50. Ҡаранан ҡара, һарынан һары,
Халыҡ яратмай уны.
Уның менән йәшәгәндең
Рәхәт күралмай йәне.

51. Бик тиҙ килә, оҙаҡ китә,
Оҙаталмай хәлең бөтә.
Теләгән ашын ашатмаһаң,
Һинең башыңа етә.
Хәлең етһә һыйларға,
Булдыралһаң ҡыйнарға,
Ул бик әрһеҙ, үҙе хәлһеҙ,
Кәрәк тиҙерәк ҡыуырға!

52. Килтереп ҡуя,
Алып китә.
Юҡты бар итә,
Барҙы юҡ итә.
Юҡ ине, бар булды;
Бар ине, юҡ булды.

# СӘЙЕТ ИСМӘҒИЛЕВ

## ҮҘЕМ ХАҠЫНДА

I

Скрипка уйнап йөрөнөм,
Етмәгән ер ҡалманы:
Элек күпме тырышһам да,
Эштәр яйлы барманы.

Мин йырлап та ҡараным,
Мин уйнап та ҡараным;
Күпме генә тырышһам да,
Саҡ-саҡ туйҙы тамағым.

Нисә йылдар мин йырланым
Йыйындарҙа, туйҙарҙа.
Бер ваҡыт бәхет тыуыр, тип
Юҡ ине һис уйҙарҙа.

Ҡулымдағы скрипкамды
Утыҙ биш йыл һаҡланым:
Йөрәгем кеүек ҡараным,
Бер ваҡыт та ватманым.

II

Шулай итеп, минең ғүмерем үтеп китте,
Йәш заманым, егет сағым үтеп китте.
Хәҙер үҙем ҡарт булһам да, йәшәүем шәп,
Элек күргән ҡайғы-хәсрәт бөтөп китте.

III

Хәҙер йырлайым колхозымды,
Шунда минең шатлығым.
Үҙ халҡыма уйнауым —
Был да бик ҙур байлығым.

*1939*



## СКРИПКА ҺӘМ ТАЙ ВАҠИҒАҺЫ

Бер ваҡытты йыйын булды
Ҙур Өфө ҡалаһында;
Шул ваҡытта мин дә булдым
Йыйындың араһында.

Йыйын булғас, ярайҙыр тип,
Мин дә уйнай башланым;
Шып-шым ғына тайып бөттө
Эргәнән юлдаштарым.

Бер городовой ырғып төштө
Эйәрләнгән ҡола аттан:
— Әйҙә, часкә!..— тип һөйрәне,
Тотоп минең ҡолаҡтан.

Ҡайыш ҡамсы ҡулында,—
Һабы тимер биҙәктән;
Часкә табан алып китте,
Ҡолағымдан етәкләп.

Приставка алып керҙе:
— Скрипач, вот,— тине;
Аҡайып бер ҡараны ла:
— Әйҙә, илтеп яп! — тине.

Өс көн яттым ҡараңғыла,
Бер нәмә лә күрмәйсе;
Ашарға ла бирмәнеләр,
Көскә сыҡтым үлмәйсе.

Яуап алып сығарҙылар,
Ебәрҙеләр төрткөләп;
Илай-илай ҡайтып киттем,
Күҙ йәшемде һөрткөләп.

Ҡайтҡан саҡта осраны
Күрше ауыл хәҙрәте;
Мыйыҡ аҫтынан йылмая —
Булдымы әҙерәк, ти.

Скрипка харам, тиеп,
Һүҙ башланы аятлап;
Уйынсылар — дошман,— тип
Һыйларға итә таяҡлап.

Ҡайтыуыма ауылда
Мир йыйыны йыйылған.

Бурысың бар түләргә, тип
Һыйырҙы алып ҡуйғандар.

Мәзин ағай ултырған
Сүмәләләй күбенеп;
Старшина ҡаршы сыҡты:
— Хәйерсе! — тип, һүгенеп.

Еҙ миҙаллы десятник
Шаҡылдата таяҡты;
Бер урынға баҫтырҙы ла,
Ҡуҙғатманы аяҡты.

Әсәй аҡса эҙләп китте
Күрше-тирә кешенән;
Бына ниндәй ауыр заман
Булды беҙҙең ишегә.

Бер тирмәнсе, бер һатыусы
Ултырғандар өҫтәлгә;
Тире йыйыусы Хәйретдин
Арттан тора өҫтәргә.

Бер душама бер таяҡ ер,
Ул да булһа — таш ҡына;
Мәшәҡәт ҙур, иген юҡ,
Хәсрәттә — баш ҡынам.

Бер тай алдым егергә,
Йыл буйы эшләп байға;
Ҡара тирем сыҡһа ла,
Булманы һис тә файҙа.

Бүтән орлоҡ булмағанға,
Сәстем һололо бойҙай;
Ер ҙә уҫал, орлоҡ насар,
Ул да булды гел ҡурай.

Аҙапланып йөрөй торғас,
Сәстем ун ҡаҙаҡ тары;
Ташландыҡ ер булғанға,
Аҡтамыр булды бары.

Аптырағас, өйҙән киттем
Биҙәләүгә [1] эшләргә;
Бер яҡтан да булмағас,
Белмәйһең ни эшләргә.

Бына шулай, балалар,
Эшләп килдек беҙ байға;



Өс һум аҡса ала инек,
Бурыстан ҡалһа, айға.

Тайым күптән үлде минең,
Скрипка — бар малым;
Совет власендә генә
Мин уны ҡулға алдым.

Ҡай сағында үткәндәрем
Иҫемә төшөп китә;
Михнәтле тормош әсеһе
Йөрәкте телеп үтә.

Үткән көнөм ҡабатланмаҫ,
Моңло, аһ-зарлы бәйет.
Яңы тормошҡа дан йырла,
Дан йырла, йырсы Сәйет!

**МИНЕҢ ЙЫРҘАРЫМ**

Йырым тыуып тора йөрәгемдә,
Тыңлағыҙ һеҙ, ҡыҙым-улдарым.
Ишетегеҙ, ҡала, ауылдарым,
Сәскәләргә сумған ҡырҙарым.

Бала сағымдан уҡ күңелемдә
Төрлө хыял-уйҙар яттылар.
Шул уйҙарым шат тормошта
Йырҙар булып сәскә аттылар.

Йәрми була минең тыуған ауыл,
Шунан сыҡты минең юлдарым.
Хәҙер ауылдарҙан ауылдарға
Яңғырап йөрөй минең йырҙарым.

Ниңә миңә музыка уйнамаҫҡа?
Илемдә бит йәшәү күңелле.
Партиябыҙ шулай нурлы итте,
Йырлы итте беҙҙең күңелде.

Бәхет йыры йырлап ғүмерем үтә
Ҡарт көнөмдә рәхәт әсендә.
Ҡарт булһам да, тормайым мин тынып,
Дәртем дә бар әле, көсөм дә.

Бик күп ауылдарҙа йөрөнөм мин,
Төрлө халыҡтарҙы күрҙем мин.
Йөрәгемдән сыҡҡан йырҙарымды
Дуҫтарыма йырлап бирҙем мин.

Һуғыш ҡырына ла барып сыҡтым,
Туғандарға бүләк илттем мин.
Йырҙар йырлап, халҡым өсөн йәшәп,
Етмеш йәштән уҙып киттем мин.

Мин маҡтайым бөйөк партиямды,
Уның бөйөк, гүҙәл эштәрен.
Коммунизмға барған илкәйемдең
Һәр көн һайын шаулап үҫкәнен.

Мин ҡыуанам, йырым әрәм китмәй—
Китап була бара барыһы ла.
Шуға рәхмәт әйтәм партияма,
Рәхмәт әйтәм бөйөк халҡыма.

*1957*



## НУЖА БАБАЙ СӘЙӘХӘТЕ

Нужа бабай аптыраған нимәгәлер,
Кемгә генә барайым, тип уйлап тора.
Байға эшләүсе бер кеше лә таба алмаған,
Дуҫ-иш юҡ, тип хәсрәтләнеп илап тора.

Тик тороуҙан файҙа юҡты күргәнгәме,
Китте Нужа колхоз урамдары буйлап.
«Берәй йортта ҡуныр урын табырмын һәм
Рәхәтләнеп шунда йәшәрмен»,— тип уйлап.

Нужа бабай йортҡа инде бик шым ғына,
Йорт эсендә һис тауыш юҡ, бик тын ғына.
Сәй ҡайнаған, икмәк бешкән—бары ла әҙер,
Нужа ҡартҡа былар булды ҡайғы ғына.

Шунда Нужа бармаҡ булды көтөүсегә,
Үҙе менән бергә ғүмер итеүсегә.
Барыу менән Нужа бабай ос(о)раны
Ҡожан кейеп, мал ҡарарға китеүсегә.

Нужа бабай алып барған күстәнәсен —
Ҡапсығынан алып ҡуйҙы киҫәктәрен.
Нужа бабай һуштан яҙып йығылып китте,
Күргән ине көтөүсенең икмәктәрен.

Нужа бабай көтөүсегә, ғәжәпләнеп,
Нимә әйтергә белмәйенсә күҙен һала.
Көтөүсенең һөйләгәнен тыңлап тороп,
Уның матур тормошона хайран ҡала.

— Нужа бабай, һин колхозға инмәйһеңме?
Колхоздағы рәхәтлекте күрмәйһеңме?
Һин ярлыһың, һин яңғыҙһың һәр ваҡытта,
Әллә һаман аҡылыңа килмәйһеңме?

— Әй, дуҫкайым, нимә бар һуң иҫәбеңдә?
Кем ашлығы ята һинең келәтеңдә?
Элек, байға көтөү көтөп йөрөгән сакта,
Юк ине бит бер ашарлык киҫәгең дә.

Мин йөрөйөм яңғыҙактар менән бергә,
Улар мине ебәрмәйҙәр йорттан бер ҙә.
Колхоз-совхоз яратмайҙар бер ҙә мине,
Хәсрәтемдән, ахыры, улым, инәм гүргә...

Нужа бабай колхозға ла инмәк була,
Бер ҙә эшләмәй генә карап йөрөмәк була.
Ике дуҫтан берәй ялкау эҙләп кенә,
Шуның менән рәхәтләнеп йөрөмәк була.

Нужа картты колхозсылар яратмайҙар,
Уның менән һис дуҫ булып калманылар.
«Колхоз өсөн бер ҙә кәрәк ереңюк»,— тип
Нужа картты колхозға ла алманылар.

Нужа бабай әллә ниҙәр уйлап бөттө,
Асыуланып, суйын юлы буйлап китте.
Капыл ғына туктап калды Нужа бабай —
Халык торған бер урынға барып етте.

Элек торған зимагорҙар был ерҙәрҙә,
Шул баракты Нужа бабай уйлап тора.
Дуҫтарымды күрәм тиеп, барып керһә,
Ул баракта радиолар уйнап тора.

Нужа бабай хәҙер тамам аптыраны,
Куркыуынан бисара карт калтыраны.
Куркыуынан Нужа бабай йығылып китте,
Сөнки белмәй, ниҙер балкып ялтыраны.

Өс-дүрт ерҙән электрик кабынып китте,
Нужа бабай калтыранды, абынып китте.
Ятһа матрац, япһа одеял — бары ла әҙер,
Нужа бабай был эшкә лә ғәжәп итте.

Нужа бабай кулын һелтәп сығып китте,
Элек заман йөрөгән ерҙән үтеп китте.
Нужа бабай бында хәҙер һис күренмәй,
Ахырыһы, сит илдәргә сығып китте.

*1939*



## БӘХЕТ-КЫҘ ТУРАҺЫНДА ҺҮҘ

Бәхет элек һыуҙа ғына йөҙгән, тиҙәр,
Унан сығып сахраларҙа гиҙгән, тиҙәр,
Бик күп айҙар, йылдар буйы шулай йөрөп,
Ахырҙа ул яңғыҙлыктан биҙгән, тиҙәр.

Бер вакытта үтеп урман, тауҙар аша,
Бәхет килеп кунаклай ҙа кая ташка,
Күҙе төшә: ауыл, кала, бакса, баҫыу,
Кот осорғос кәберлектәр ята аҫта.

Инә лә ул бер матур кыҙ һүрәтенә
Акрын ғына атлап китә урам буйлап.
Ғорур башын бер аҙ ғына түбән эйеп,
Нишләргә, тип тәрән-тәрән уйҙар уйлап.

Был бәхет-кыҙ бар халыкка бармак була,
Бармағында саф алтындан балдак була.
Һәр бер өйгә байлык, муллык бирер өсөн,
Халык менән мәңге бергә калмак була.

Бына теге Бәхет-кыҙҙы бары ла эҙләй,
Кайҙа тора, кайҙа йөрөй, шуны күҙләй.
Ул Бәхет-кыҙ эшсән ғаиләләргә инһә,
Эш һөймәҫтәр уны тартып ала, түҙмәй.

— Миңә кил дә миңә кил! — тип кыскыралар,
Кемгә барһа, шул кешенән көнләшәләр;
Бәхет-кыҙҙы үҙҙәренә алыр өсөн,
Хәйлә короп кан коялар, көрәшәләр.

Канлы батша ишетеп алып был турала:
— Мин ул кыҙҙы төшөрөрмөн,— ти,— кулыма.
Илгә ғәскәр, поп һәм муллалар ебәреп,
Кәртә кора Бәхет-кыҙҙың бар юлына.

Улар әйтә: — Бәхет алла кулында,—тип,—
Ә донъяла фәкәт ендәр генә бар,—тип.—
Имеш, улар которталар, аҙҙыралар,
Кешеләрҙе тура юлдан яҙҙыралар.

Кем аллаға, дингә каршы ауыҙ аса,
Беҙ уларҙы бөтөрәбеҙ! — тип ажғыралар.
Аллаһы ла, муллаһы ла, поптары ла:
— Бәхет-кыҙҙы эҙләйһегеҙ,— ти,— юкка ғына.

Тәкдир нисек яҙған — шулай йәшәмәйсә,
Үҙегеҙҙе һалаһығыҙ утка ғына!

Ә үҙҙәре, ҡараҡ кеүек, ҡасып-боҫоп,
Бәхет-ҡыҙы йоҡлап ятҡан өйгә килгән.

Түшәктә үк аяҡ-ҡулын бәйләп, уны
Ҡанлы батша һарайына илтеп биргән.
Бәхет-ҡыҙы уянған да һорау биргән:
— Мине кемдәр атты былай ҡан баҙына?

Был һарайҙар хужаһының йөрәгендә
Миһырбанлыҡ бармы,— тигән,— бер аҙ ғына?
Таш түгел, кеше һөйәге — нигеҙҙәре,
Һарҡып ята дым урынына — ҡан әҙҙәре.

Һарайҙан тыш бөтә ерҙә үлем быуа
Халыҡтарҙы иртә-кисен, көндөҙҙәрен.
Ҡалтыранып икмәк һорай балалары,
Йөҙөн япҡан үлем ағы әсәләрҙең.

Һуңғы ҡалъяларын ҡоҙғон соҡоп ятҡан
Кәүҙә менән тулған сахра, далалары.
Мин был хәлгә үлгәндә лә риза түгел,
Ҡайҙа халыҡ — шунда оса минең күңел.

Бында һис тә ҡалмайым, сығып китәм,
Халыҡ менән һарайҙарын уның тетәм!
Ҡанлы батша ҡыҙҙың һүҙен ишеткәс тә:
— Барығыҙ! — тип асыуланып әмер иткән.

Жандармдар Бәхет-ҡыҙҙы яра-яра,
Быуау һалып тар төрмәгә алып киткән.
Тигеҙһеҙлек хөкөм һөргән батшалыҡта
Бәхет-ҡыҙы тотҡонлоҡта ғазап сиккән.

Сыға алмаған яҡтылыҡҡа, көнгә, илгә,
Аслыҡ, үлем ҡыроп йөрөгән бөтә ерҙә...
Бәхет-ҡыҙ Ленингә хат яҙып һала,
Ленин, уны уҡып, тәрән уйға ҡала.

Яҡындарын үҙ янына саҡыра ла,
Кәңәшләшеп, шундай фекер туплап ала:
— Ойоштороп төрлө милләт халыҡтарын,
Алып бирәйек тыуған илдең байлыҡтарын.

Кемдәр эшләй, шулар яҡты донъя күрһен,
Үҙ бәхетен үҙҙәре үк татып белһен.
Батша, байҙар, поп, муллалар берләшәләр,
Бәхет-ҡыҙҙы бирмәҫ өсөн көрәшәләр.

Әгәр ул ҡыҙ ҡулдарынан сығып китһә,
Беҙҙең көндәр бөтөр, тиеп көнләшәләр.



Ленин яғы көндән-көн арта бара,
Йыйыла унда ил улдары, ата-әсә.

Батшалыҡты, байҙар яуын тар-мар итеп,
Илгә халыҡ үҙе хужа булып ҡала.
Бәхет-ҡыҙы ирек алып сығып китә,
Азатлыҡты — ҙур байрамды ҡаршы ала.

Заводтарға, фабриктәргә барып керә,
Ауылдарҙа ярлы өйгә уҙа түргә.
Ҡайҙа барһа — шунда уны ҡунаҡ күреп,
Был Бәхет-ҡыҙ шул көндән һуң һәр эшендә
Уртаҡ булып ысын хәленә ҡайтып ҡала.

Бер көн шулай өйҙә ултырам тып-тын ғына,
Бер матур ҡыҙ килеп керҙе ҡупшы ғына,
Инеү менән, йүгереп килеп, ҡулын бирҙе:
— Ни хәл, Сәйет? Скрипка уйна,— тине.—
Таныйһыңмы? Мин Бәхет-ҡыҙ булам,— тине,—
Бер ҡасан да ташламамын, бабай, һине.
Ҡыуан әйҙә, рәхәтләнеп йырла,— тине.

Икәүләшеп тирләп-бешеп сәй эстек беҙ,
Патефоным гөрләп торҙо йорт түрендә.
Бәхет һәм мул тормош биргәне өсөн,
Партияға рәхмәт әйтәм ысын күңелдән.

*1940*

## ИКЕ ТОРМОШ ҺӨЙЛӘШЕҮЕ

Яңы тормош, иҫке тормош
Осраштылар Уралда.
Шул урында тура килде
Һөйләшергә уларға.
Яңы тормош тыныс ҡына
Һорау бирә башланы.
Иҫке тормош иҫкәрмәҫтән
Серен сисеп ташланы.

Я ң ы  т о р м о ш:

Ни хәл, бабай, эштәр нисек,
Күренмәй ҙә башланың?
Был тирәлә осрамайһың,
Ахыры, беҙҙе ташланың.

И ҫ к е  т о р м о ш:

Элек бында кескәй завод,
Бар ине иҫке барак.

Бер ҙә элеккесә түгел,
Байтаҡ йөрөнөм ҡарап.
Иҫке барак урынында
Бейек таш йорттар үҫкән.
Йорттарҙың эсенә, балҡып,
Электр нуры төшкән.
Инһәм йорттоң эсенә,
Төрлө күҙгә, карауат,
Бүлмәлә — күҙгә, карауат,
Кем һуң бында тора? Вәт!

Яңы тормош:

Барыһы ла — халыҡтыҡы,
Тормошобоҙ — гөл кеүек.
Элек кенә донъя көтөү
Булды ҡара төн кеүек.

Иҫке тормош:

Ике түгел, дүртәү мәллә,
Әйтсе, һеҙҙең ҡулығыҙ?
Тауы-ташы аҡтарылған,
Күҙгә кеүек юлығыҙ.
Ә заводҡа йөк ташырға
Юҡ атығыҙ, дейәгеҙ.
Юҡмы заводтың хужаһы,
Юҡмы ни һуң байығыҙ?

Яңы тормош:

Хәҙер бында мин хужамын,
Был түгел бит һеҙҙеке,
Күллө завод, күллө малдар —
Бары үҙебеҙҙеке.

Иҫке тормош:

Туҡтасы, һис аңламайым,
Түгелме, улай яйһыҙ?
Һеҙгә кем эш хаҡы түләй,
Эш нисек бара байһыҙ?

Яңы тормош:

Миндә хәҙер гел машина,
Йөрөмәйем тай менән;
Аҡсаға ла үҙем хужа,
Һөйләшмәйем бай менән.

Иҫке тормош:

Атһыҙ-ниһеҙ арба күрҙем,
Ул нимә була тағы?
Ҡараниһәң, күҙҙең яуын
Алып тора яҡ-яғы.



Үҙ-үҙенә тәгәрәй ул —
Ат тартып бармай юртып.
Күҙемә ен күренде, тип,
Саҡ-саҡ үлмәнем ҡурҡып.

Яңы тормош:

Ул була автомобилем,
Бензин менән тарттырам.
Аңа шундай аттарҙы мин
Көнгә меңде арттырам.

Иҫке тормош:

Күктә-күктә ҡошоң бар,
Бөркөт тиһәм — аҡ ҡына.
Болоттан да бейек оса,
Талыу белмәй саҡ ҡына.

Яңы тормош:

Күктә-күктә осҡаны,
Болоттарҙы ҡосҡаны —
Самолет ул. Белеп ҡуй,
Күңелеңә һалып ҡуй.
Ә эсендә кеше бар,
Һәр берепең эше бар.
Түбән остан Сәрби әбей
Осоп бара ҡунаҡҡа.
Үрге остан Ғимай бабай
Туйға бара йыраҡҡа.
Төрлө нәмә йөрөтә ул,
Ни генә юҡ йөгөндә!
Тыныслыкты һаклап тора
Тыуған илдең сигендә.
Әйтерһең дә, күк күгәрсен,
Тыныслыктың ҡошо ул.
Туполевтәр эшләй уны,
Кешелектең дуҫы ул.
Үләм тиеп ятҡандарға
Йәшәү тейәп килтерә.
Себендәрҙе, серәкәйҙе
Томан һибеп бөтөрә.

Иҫке тормош:

Таутөмәндән сыҡкас та
Йәйәүләп килдем ҡарап.
Шул ҡәҙәр күп йорт һалғанһың,
Уйлаһаң, эштәр харап.
Заводтарың иҫ китерлек,
Ҡайҙан уйлап еткәнһең.
Ерҙең шундай ҙур мөйөшөн
Гөл баҡсаһы иткәнһең.

Әллә күҙем яңлышамы?
Күрәм мәллә төшөмдә?
Әллә ендәр эшләгәнме
Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә!
Бында элек бай малдары
Йөрөйҙәр ине утлап.
Арбаға ла юл юҡ ине,
Бар ине тик тар һуҡмаҡ:
Бында элек ята ине
Йомрандар ҙа ҡуяндар.
Хәҙер бында Мәскәүҙең
Үҙен килтереп ҡуйғандар!

Яңы тормош:

Бына шулай икебеҙҙә
Ике торлө юл инде.
Донъя йөҙөн матур итеү —
Минең юлым шул инде.

Иҫке тормош:

Яландарҙан үткән саҡта
Иҫем китте, ни тием?
Ғәжәпләнеп ҡарап үттем,
Һабан һөрә фил, тиеп.
Атһыҙ арбаға ултырып,
Тоҡтар тейәп үттеләр.
Алып килгән ҡапсыҡтарын
Бер улаҡҡа түктеләр.
Улаҡ йөрөй «фил» артынан
Үҙенән-үҙе сәсеп.
Вәт һиңә был замана, тим,
Вәт һиңә ғәжәп кәсеп!

Яңы тормош:

Белмәйһең шул, фил түгел ул,
Ҙур трактор — ЧТЗ-ым.
ЧТЗ-ны йөрөтөүсе —
Минең берҙән-бер ҡыҙым.

Иҫке тормош:

Ә баҫыуҙа береһен күрҙем —
Туҙҙырып килә туҙан.
Ләхәүләне уҡыйым да
Соҡор буйына һыҙам.
Ҡурҡыуымдан күҙем тонған,
Тиргә батҡан маңлайым.

Яңы тормош:

Үҙе ура, үҙе һуға,
Ул бит минең комбайн.



Иҫке тормош:

Килеп керҙем ҡалаға,
Ҡалдым тағы хайранға.
Кешеләр шат: әйтерһең дә,
Йыйыншандар байрамға.
Ике вагон сабып үтте,
Тәгәрмәсе әйләнеп.
Ыбый-сыбый тимер сыбыҡ
Өҫтә тора бәйләнеп.
Колоколы бар, ахыры,
Китер булһа, шалтырай.
Сыбыҡҡа сыбыҡ тейҙеме,
Өҫтә уттар ялтырай.
Исеме әллә Иранбай,
Әллә инде Буранбай?
Эсенә халыҡ тулды,
Йөҙ генә булыр, буғай.

Яңы тормош:

Һин үҙең ул Иранбай
Йә булмаһа Буранбай!
Тимер юлдан йөрөп яткан —
Трам-трам, трамвай!

Иҫке тормош:

Ауылына килеп керһәң,
Юҡ уларҙың межаһы.
Һабан бергә, аттар бергә,
Юҡ халыҡтың нужаһы.
Ашлыҡ бергә, малдар бергә,
Бергә бәрәңге, һуған;
Үҙҙәре шундай татыуҙар,
Әйтерһең дә, бер туған.
Миңә көн дә ҡалманы,
Хәҙер ни хәл итергә?
Ахыры, нужа ҡартты эҙләп,
Тура килер китергә.
Нужа меҫкен бик дуҫ ине,
Бергәләп ғүмер иттек.
Рәте бөткәс, ул да, бахыр,
Олаҡты ситкә китеп.

Яңы тормош:

Йәшәреңде йәшәгәнһең,
Кәрәгең юҡ бөгөндән.
Иҫке-моҫҡондо тейә лә,
Әйҙә, юғал күҙемдән!

*1941*

## БҮРЕ МЕНӘН ТӨЛКӨ ХИКӘЙӘҺЕ

Бүре ағай сығып китә йөрөр өсөн,
Төрлө ерҙә күп нәмәләр күрер өсөн.
Бурһыҡ торған тау ҡырына килә бүре,
Берәй бәхет был урында булыр төҫлө.

Сысҡан эҙләп оҙон ҡойроҡ төлкө килә,
Бүре ағай инде быны күптән белә.
Быныһы тағы һимеҙерәк булыр, ти, ул,
Бүренең ауыҙынан һыуҙар килә.

Бүре шулай төлкөнө күреп ҡала,
Һис бер ҡайҙа ебәрмәйсе элеп ала.
Төлкө инде бүрене күреү менән,
Ҡурҡыуынан, аптырауҙан хайран ҡала.
Төлкө, бүре ҡапма-ҡаршы килештеләр,
— Нихәл, әй? — тип ҡулдарын да бирештеләр.
Үҙҙәренең күргән-белгән хәлдәренән
Һөйләшергә, серләшергә керештеләр.

Б ү р е:
— Төлкө ҡустым, ҡойроғондо һатмайһыңмы?
Тау буйынан сысҡан эҙләп сапмайһыңмы?
Ҡара, минең батырлыҡты күрәһеңме,
Бүре ағай матур, тип маҡтайһыңмы?

Төлкө дуҫым, тиреңде алайымсы,
Кил, елкәмә матур итеп һалайымсы.
Ҡалалағы матур ғына ҡыҙҙар кеүек,
Мин дә шунда бер аҙ йөрөп ҡалайымсы.

Т ө л к ө:
— Бүре ағай, тыңлайым мин бойороғонды,
Бирәм һиңә тирем менән ҡойроғомдо.
Минең бар алып килгән тауыҡтарым,
Күрһәтәйем һинең өсөн ҙур һыйымды.
Бүре ағай, әйҙә, минән ҡалма ғына,
Алыҫ түгел, күрерһең һин, бында ғына.

Төлкө белә һунарсының ҡапҡандарын,
Ҡапҡандарҙың бүре көтөп ятҡандарын.
Төлкө алдан шыма ғына атлап бара,
Тауыҡтарым бик һимеҙ, тип маҡтап бара.
Бүре, бында бик ҙур төшөм булды бит, тип,
Үҙ-үҙенә тамаҡ ҡыра, хайран ҡала.

Төлкө хәҙер ҡапҡандарға килеп етә,
Баҫмай ғына бер яҡ ситтән үтеп китә.



Һый-хөрмәтте уйлап барған бүре ағай
Ҡапҡанға етеү менән дертләп китә.

Бүре хәҙер ҡурҡыуынан олой башлай,
Аяҡтары ҡыҫылғанға дулай башлай.
Телдән тайып, ыңғырашып, аҡыра башлай
Һәм төлкөнө ярҙамға ул саҡыра башлай.

Т ө л к ө:
— Бүре, ниңә һин тауыҡҡа үрелмәйһең,
Һимеҙҙәр бит, әллә ашарға иренәһең?
Һунарсылар бурһыҡ ите алып килер,
Ашарһың да шул сағында терелерһең.
Бүре ағай, кәрәкмәйме ҡойроҡ һиңә?
Матур итеп һалыр инең киң елкәңә.
Һунарсылар алыҫ түгел, килер бында,
Ни теләһәң, барын хәҙер бирер һиңә.

*1947*

## БӘХЕТ ҠОШО ХАҠЫНДА

Бәхет ҡошо күктә түгел, ерҙә, тиҙәр,
Һәр ваҡытта халыҡ менән бергә, тиҙәр;
Сит илдәргә осоп бер ҙә китмәй, тиҙәр,
Ысын тормош үҙебеҙҙең илдә, тиҙәр.

Бәхет ҡошон Мәскәүҙә йөрөткәндәр,
Һәр бер эште һөйләр өсөн өйрәткәндәр.
Ялҡауҙымы, эшсәндеме яратҡанын
Һорап, унан дөрөҫлөктө һөйләткәндәр.

Мин халыҡты күреү менән беләм, тигән,
Яндарына яҡын ғына киләм, тигән;
Эш яратҡан, эшләй белгән кешеләргә
Дуҫ булырға ысын вәғәҙә бирәм, тигән.

Бәхет ҡошо төҫкә сибәр, ҙур түгел, ти,
Ҡарға, ҡоҙғон, һайыҫҡанға ҡул түгел, ти;
Ялҡауҙарҙы, оятһыҙҙы яратмай, ти,
Улар менән дуҫ булыусы ул түгел, ти.

Осҡан саҡта ҡанаттарын тарата, ти,
Күп халыҡты ул үҙенә ҡарата, ти.
Мал ҡараусы, яҡшы һыйыр һауыусыны
Ысын күңел менән һөйә, ярата, ти.

Йөрөй икән колхоздарҙа, совхоздарҙа,
Илдәге һәр ауылдарҙа, ҡалаларҙа.
Минең менән мәңге бергә булырһыҙ, тип,
Шатлыҡ бирә яҡшы уҡыған балаларға.

Бәхет кошон элек байҙар каптырғандар,
Ебәрмәйсә ситлектәргә яптырғандар.
Эш кешеһе менән бергә булды ниһә,
Дөм-караңғы төрмәләргә яптырғандар.

Байҙарҙың да һис калманы тоторлоғо,
Бәхет кошо юл әҙерләй котолорға.
Ул байҙарҙың тоҙактарын өҙөп сығып,
Эшселәргә уйлай хәҙер дуҫ булырға.

Бәхет кошо сирләп китә эсе менән,
Байҙарҙың яфалаған эше менән,
Бер вакыт ул шатланып сығып оса
Партияның данлы корос көсө менән.

Бәхет кошо эҙләп таба партияны,
Эшселәрҙең килеп куна beләгенә.
Хәҙер инде һеҙҙең менән мәңге бергә,
Осраным, ти, ҙур шатлыклы теләгемә.

Бәхет кошон тотмайҙар ҙа, япмайҙар ҙа,
Комсомолдар, коммунистәр яклай бар ҙа.
Булғаныбыҙ шат тормошта йәшәрбеҙ, тип
Кул бирәләр шунда булған эшселәр ҙә.

Бәхет кошо сәсән картка килеп куна,
Йәшәрһең, ти, йөҙ йәштәрең тулыуында.
Йырла, бабай, уйна, бабай, шатлык һиңә!
Минең менән һин дә бергә булырһың, ти.

## НУЖА КАРТТЫҢ УЛЫ КОРОБАЙ ХАКЫНДА

### I

Сәйет яҙған Нужа һеҙгә таныштыр,
Ялғанлай белмәйем һис, был бар эштер.
Әммә Нужа карттың кай бер серҙәрен
Әйткәнем юк ине әле һеҙгә мин.
Ай-һай, яуыз карт та булып сыкты һуң,
Хәтеремә тағы ла килеп төштө шул.
Төшмәне иҫке яуыз булған өсөн,
Төштө яуыздарға күп булғас үсем.
Тәүҙә был хакта әйтәм һеҙгә шуны,
Булған, күрәһең, карттың туған улы.
Бөгөн ошо хакта яҙып үтермен
Һәм бына башлап та алып киттем мин.



### II

Нужа беҙҙең илдән каскан сағында,
Бик яуыз бер уй уйлаған тағы ла.
Был хурлыклы кыуылыуҙан ғәрләнеп,
Юха йыландай кыркка бөгәрләнеп,
Һелтәп дәһшәтле коро һөйәк кулын
Үҙ янына сакырып алған улын.
Коробай ине исеме улының,
Бик шәп ярҙамсыһы булды ул уның.
Кейгәне уның эҫе һауа икән,
Иген сәскән кырға ул ауа икән.
Эскәне ел, ашағаны тупрак, ти,
Дым, ямғырҙар бик эсен бошора, ти,
Ком һипкелдәр менән тулған, ти, йөҙө,
Бик холокһоҙ һәм әҙәпһеҙ, ти, үҙе.
Аяк-кулдары уттан кыҙыу икән,
Шул кыҙыулыктан йөрәге лә кипкән.
Кипкән дә бик бәләкәй булып калған,
Шуға ла бар мәрхәмәте юғалған.
Комло сүлдәрҙә йәшәп ята икән,
Яуызлык уйлап башыката икән.
Бына шундай улын Нужа сакырған,
Һаубуллашкан һәм әйткән ахырҙан:
— Инде бында йәшәр хәлем калманы,
Пландарым ғәмәлгә аша алманы.
Ләкин, улым, һинең калыуың кәрәк,
Һиңә әле баш эйергә иртәрәк.
Яңғыҙың тороп калаһың, бул зирәк,
Тик ятма, йөрөргә тырыш күберәк.
Ләкин, аң бул, бик уҫал дошманың бар,
Һакланырға тырыш, улым, ана шунан.
Исеме уның Йәшел урман булалыр,
Һәр ерҙә беҙҙе һағалап торалыр.
Бар тағы ла уның бик якын дуҫы,
Тере һыуҙар тип атала уныһы.
Шулар алдында күҙ йомоп калмасы,
Берүк, шуларға якын да бармасы.
Егет булһаң, һин, Коробай, аңласы,
Күберәк асык яландарҙа аунасы.

Бына нәмә әйткән Нужа тағы ла
Океан артына киткән сағында:
— Был илдәге кешеләрҙе мин беләм,
Гел беҙгә каршы эшләйҙәр, гөлгенәм.
Хайран калдым Волга буйлап үткәндә —
Беҙгә төрлө тоҙак короп боткәндәр.
Килеп сыккайным төрөкмәндәр янына,
Ышана алмай торҙом хатта аңыма...

Күҙ алдымда комдар, йәшәрә барҙы,
Шунан тайҙым — әсемдә сәнсеү алды!
Коробайым, нык тырышсы эшләргә,
Көйҙөр, яндыр, тынғы бирмә кешеләргә..
Бына шулай әйткән Нужа тағы ла,
Океан артына киткән сағында.

III

Их, Коробай которонған, аунаған —
Яңғыҙ калыу ауырлығын аңлаған.
Эшләгән, тик һис тә рәт сыкмаған,
Ләкин бирешергә иҫәп тотмаған.
Көйҙөрмәксе булған ул емештәрҙе,
Инештәр тулып аккан көмөштәрҙе.
Кырҙағы һәр бураҙнаға бәйләнгән,
Өйөрмә булып зыр түңәрәк әйләнгән..
Яңы баксаларға һуҙған кулдарын,
Ужымдарға өргән әҫе тындарын.
Аслык менән куркытырға тырышкан,.
Башактар менән бәйләнеп һуғышкан..
Ком бурандары күтәргән һыҙғырып,
Күп баҫыуҙарға бирмәгән тынғылык.
Кешеләргә бәлә һалып йөрөгән,
Тәүҙә бына шулай ул ғүмер һөргән.

IV

Бына бер ҙур эшкә ниәт иткән ул,
Көн дә йөрөгән юлы буйлап киткән ул..
Ыжғырынып, шомло йырын көйләгән,
Волга буйын көйҙөрөргә теләгән.
Кырҙар буйлап атлап барған үкереп,
Волганы ла аша сыккан һикереп.
Күҙенә һис ак-кара күренмәгән,
Йылға буйлап һаман үргә үрләгән.
Ләкин бик ғәжәпкә калған Коробай:
Ерҙәр бында һис тә көймәй, коромай!
Караған ул, тамам башы әйләнгән,
Күҙҙәре бер мөғжизәне шәйләгән.
Ҙур бер канал булып һыу килә икән,
Һәр урында шат йыр ишетелә икән.
Канал буйлап пароходтар килгәндәр,
Шат тулкындар Коробайҙан көлгәндәр..
Тере һыуҙар, тип кыуанған кешеләр,
Коробайҙан мең тапкырға көслөләр.
Коробай ишеткәс ошо һүҙҙәрҙе,
Сәсрәп сығырға етешкән күҙҙәре.
Аҙаштырҙы мине, тигән, был һыуҙар,



Үкереп илап ебәргән ярһыуҙан.
Аҙак сабып, кайтыр якка һыҙҙырған,
Йығылып, өс-дүрт кабырғаһын һындырған.
Кайтып етер сакта тағы аҙашкан,
Хәҙер тамам акылынан ул шашкан.
Тап ул тыуып-үҫкән сүлдәр өҫтөндә
Уға төрлө ят тауыштар ишетелгән.
Яу күтәргән кеүек, килгән кешеләр,
Комдар актарылған улар көсөнән.
Шундай дуҫтар икән улар үҙҙәре,
Тыныслык! — тип һөйөп әйткән һүҙҙәре.
Ер йәшәрә барған улар артынан,
Шаулы бакса һәм урмандар калкынған.
Аҙашкан Коробай үкһеп илаған,
Киткән яғына яңынан юл алған.

V

Аһ-зар менән Дон буйына килгән ул,
Утыҙ биш йыл элек бында йөрөгән ул.
Ләкин бөгөн ни күҙе менән күрһен,
Танырлык та түгел бында ер өҫтөн.
Һәр урында машина йырлап бара,
Тауҙай яһап бураҙналар актара.
Йыл әйләнәһенә ерҙә дым бөтмәй,
Ямғыр теләп поптары тәре үпмәй.
Яр буйында бутка ла бешермәйҙәр,
Сихырсылар доға укып йөрөмәйҙәр.
Коробайҙың хәсрәтенә сик тә юк,
Бында уның үлеренә шик тә юк!

VI

...Тик шулай ҙа хәл алған ул әкренләп,
Һәм Нужа карттың һүҙҙәрен хәтерләп,
Нык торорға карар иткән ул бында,
Кәртә кормак булған халыктың юлында,
Теләгән үҙенә торлак корорға,
Нужа карттың ярҙамсыһы булырға.
Һелккеләп уттай кыҙыу кейемдәрен,
Өрөргә тотонған әҫе елдәрен.
Интегә башлаған бик күп ауылдар,
Кубып кына торған шомло дауылдар:
Әгәр Коробай ергә ята икән,
Баш коҫкан иген көйөп ката икән;
Әгәр Коробай кулын һелтәй икән,
Елдәр бик тә алыҫка китә икән;
Әгәр ҙә Коробай һыҙғыра икән,
Көндәр әҫе булып кыҙҙыра икән.

Туғайҙарҙа була икән күңелһеҙ,
Малдар кала икән аҙык-түлекһеҙ,
Күп тереклек интегә, ти, шул сағын,
Ә Коробай күптерә, ти, корһағын.
Ләкин быға сара тапкан кешеләр —
Берҙәм купкан улар тыныс эш менән.
Көнө-төнө эш өҫтөндә булғандар,
Ғәжәп якшы машиналар корғандар.
Ҙур тештәрҙе әйләндереп моторҙар,
Коробайҙың елкәһенә батырған.
Ә Коробай дулап котола икән,
Үҙ эшенә тағы тотона икән.
Тик кешеләр уны кыуып барғандар,
Тере һыуҙар өсөн юлдар һалғандар.
Ергә ағас орлоктары сәскәндәр,
Сәсеү майҙандарын киңәйткәндәр.
Һәм баҫыуҙар якшы итеп ашланған,—
Коробайҙың хәле бөтә башлаған.
Шуға ер ҙә кайғырыуын ташлаған,
Йөкләп-йөкләп иген бирә башлаған.
Их, кайғырған, ти, Коробай, бөлдөм, тип,
Йәш сағымда рәхәт ғүмер һөрҙөм, тип.
Көн үткән дә тағы таң аткан икән,
Ул хәҙер хәлдән тайып яткан икән.

## VII

Көндәр үткән. Баксалар үҫеп торған,
Тәмле-тәмле емештәр бешеп торған.
Емештәрҙән хөрмәт күргән кешеләр,
Бәхетте яулағас берҙәм көс менән.
Йәшел диңгеҙ кеүек булган туғайҙар,
Тармакланып үҫкән хатта бойҙайҙар.
Шаулап үҫкән яңы йәшел урмандар,
Унда дәртле коштар һайрап торғандар.
Илһам биргән үҙенең көслө халкына
Коммунизмгә илтеүсе партия.
Якты булған кешеләрҙең һәр таңы,
Кеүәтләнгән тыныслыктың Ватаны.

Һаман шулай таң артынан таң тыуған,
Хеҙмәт шауы, тантана яңғырап торған.
Илде гөлгә күмер өсөн халыктар
Тағы ла ҙур дәрттәр менән калккан.
Булған уңыштарҙан һис тынмағандар,
Яңы диңгеҙ яһарға уйлағандар.
Уйлағандар, бөтә донъя күрһен, тип,
Шул диңгеҙҙәй тулы бәхет килһен, тип.
Шул диңгеҙ бергә тоташып торһон, тип,



Коробайҙың көлө күккә оҫһон, тип.
Волга менән Дон уларға буйһонған,
Ә Коробайҙың тындары кыҫылған.
Тамам инде көсһоҙ булып калған ул,
Кәүҙәһен дә тота алмай ауған ул.
Башын күтәреп караһа, ни күргән:
Оло диңгеҙ ташкыны шаулап килгән.
Ошо диңгеҙҙе күреп шак каткан ул,
Шул диңгеҙ аҫтында калып баткан ул.
Тере һыуҙар шулай уны каплаған,—
Коробайҙың ком корһағы шартлаған.
Ошо хәлде Нужа карт та ишеткән,
Хәҙер унда мәңге кайтмам, тип әйткән.

*1952*

## АКЫЛ БАБАЙ ХАКЫНДА

Акыл бабай сығып китте
йөрөр өсөн,
Донъялағы төрлө хәлдәр
күрер өсөн,
Етешмәгән эштәр булһа,
Якшы ярҙам бирер өсөн.

Барып керә урмандарға,
Ағас киҫеп торғандарға,
Рәхмәт, тиеп үтеп китә
Уңған, батыр булғандарға.

Барып керә көтөүсегә,
Якшы хеҙмәт итеүсегә,
Хеҙмәт һалып, иген алып,
Рәхәт ғүмер итеүсегә.

Күҙен һала нормаларға,
Бесәненә, тоҙҙарына,
Төрлө якшы һүҙҙәр һөйләй
Һыйыр һауған кыҙҙарына.

«Ныклы һеҙҙең беләгегеҙ,
Калтырамай йөрәгегеҙ,
Рәхәттә, тыныслыкта
Булһын һеҙҙең теләгегеҙ!»

Барып керә театрға,
Уйлап тора ни әйтергә,
Артистәргә һүҙҙәр һөйләй
Культураны киңәйтергә.